✓ *Бер аҡыл эйәһе урам буйлап йүгергән кешене туҡтата ла: "Ҡайҙа ашыҡһаң?" - тип һорай. "Үҙемә һәм ғаиләмә туҡланыр ризыҡ эҙләйем",- тип яуаплай тегеһе. "Ә ул ризыҡ һинән алда йүгерә һәм уны ҡыуа төшөргә кәрәк икәнен ҡайҙан беләһең? - ти аҡыл эйәһе. - Бәлки, ул, киреһенсә, һинең арттан киләлер һәм һиңә туҡтап, уны көтөп торорға кәрәктер?" Ҡайны саҡта беҙ үҙебеҙҙең иң мөһим юлыбыҙҙы йүгереп үткәнебеҙҙе һәм уның артта ҡалғанын аңламайбыҙ шул...*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

25 ФЕВРАЛЬ - 2 МАРТ (ШАҠАЙ - БУРАНАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№8 (478)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Барҙым әле баҙарға...**



3

**Туған тел дә кәрәклеген...**

ата-әсәгә нисек аңлатырға?



4

**Ҡарамышевтар нәҫеле**



7

**Граждандарҙы - дәүләт,**



8-9 милләттәрҙе Аллаһы Тәғәлә барлыҡҡа килтергән...

14 ТВ-программа


*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## Буласаҡ ил Президентының, төрлө кимәлдәге депутаттар корпустары әһелдәренең төп кешелек сифаттары ниндәй булырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?

***Ғәлим ХИСАМОВ, яҙыусы:*** Яҡшы сәйәсмән иң тәүҙә тыуған Ватаны һәм туған халҡы тураһында уйларға тейеш. Дөрөҫөн әйткәндә, уларҙың бөтөн маҡсаты һәм ынтылышы ошо ерлектән йүнәлеш алырға һәм ошо мәнфәғәткә хеҙмәт итергә тейеш. Ил Президентлығына дәғүә итеүсе кандидаттар, шулай итеп, үҙ программаларын илһөйәрлек принцибынан сығып төҙөргә тейеш. Ысынлап та, был юлы кандидаттарҙың һәр береһе программаларына милләт мәсьәләләрен индереп, үҙҙәренең илһөйәрлеген һәм телһөйәрлеген дә күрһәтте һымаҡ. Ә ошоно уҡ беҙ РФ Дәүләт Думаһы, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай һәм башҡа кимәлдәге депутаттарҙан да талап итә алабыҙмы?

Беҙ Рәсәй дәүләтенең именлеген һәм тотороҡлолоғон, уның сафлығын тәьмин итеү маҡсатында төрлө милләт халыҡтарының берҙәмлеген, уларҙың телдәрен, мәҙәниәтен һәм йола-традицияларын һаҡлауға йүнәлтелгән сәйәсәттә торған Президент яҡлыбыҙ. Сөнки Рәсәй үҙенең күп милләтле халҡы менән ҡеүәтле. Ошоно аңлап, илдең төп хазинаһын тәшкил иткән төрлө милләт халыҡтарының илһөйәрлек традицияларын үҫтереүгә, үҙ илен һаҡлауға ынтылыштарын яҡлауға йөҙ тотҡан ил башлығы, асылда, Рәсәйҙең бөйөклөгөн, бөтөнлөгөн һәм ныҡлығын һаҡлай, тигән һүҙ. Әлбиттә, теге йәки был мәсьәлә буйынса беҙ һәр ваҡытта ла ил Президенты менән бәйләнешкә инә алмайбыҙ, уның ҡарауы депутаттар корпусы аша диалогка инеү мөмкинлеге бар, сөнки депутат - ул халыҡтың ышаныс белдереп һайлап ҡуйылған вәкиле. Үкенескә ҡаршы, бөгөнгө көндә депутаттарҙың бына ошо тура тәғәйенләнеше онотола бара, шунлыҡтан власть менән халыҡ араһында диалог юғала. Депутаттар үҙен юғары власҡа күтәргән халыҡ тауышын ишетмәй ҙә, уның йәшәйешен, ихтыяждарын белмәй ҙә, күрмәй ҙә. Депутатлыҡҡа ынтылыуҙың башҡа төрлө сәбәптәре өҫтөнлөк алды, күптәр өсөн был иң тәүҙә шәхси мәнфәғәттәрен хәл итеү, байлыҡ туплап ҡалыу кеүек хәстәрлектәр сараһы. Ә инде юғары власть менән халыҡ араһында элемтә, аралашыу ебе өҙөлә икән, бындай ил яйлап космополитизм һәм глобализмға йүнәлеш ала. Мәҫәлән, телебеҙ торошон ғына алып ҡарайыҡ. Рус теле бит тотош инглиз теле терминдары менән сыбарлана бара. Башҡа өлкәләрҙе әйтеп торорға ла түгел. Мәғариф, мәҙәниәт буйынса проекттарҙа торған һайын көнбайыш өлгөләренә өҫтөнлөк бирелә. Ил башлығы патриот булған илдә бындай йүнәлешкә юл ҡуйылырға тейеш түгел. Урыҫ милләте үҙ илендәге башҡа милләттәрҙе ҡурсыуға ала икән, ошо уҡ милләт халыҡтары бөйөк Рәсәйҙе, тимәк, урыҫтарҙы ла көслө итәсәк бит. Беҙ урыҫ менән әлмисаҡтан бергә йәшәйбеҙ, урыҫ телен яратабыҙ, уны ҡабул иткәнбеҙ, был телдә иркен һөйләшәбеҙ, ләкин шул уҡ ваҡытта үҙебеҙҙе лә онотмайбыҙ. Беҙ берҙәмлек менән көслөбөҙ. Бына ошонда тыуа ла инде илһөйәрлек тойғоһо.

**(Дауамы 2-се биттә).**

*"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ*

# БЕР УРТЛАМ ТЕРЕҺЫУҘАЙ

Һоҡланғыс, ожмахҡа тиң ерҙә халыҡ йәшәгән. Бөйөк булған был халыҡ: тамырҙары кешелектең иң боронғо замандарына тоташҡан, "Авеста", "Ригведа" кеүек үлемһеҙ әҫәрҙәр менән бер рәттә торған "Урал батыр" эпосын ижад иткән ул. Рухы көслө, ныҡ булған был халыҡтың, донъя тарихында азатлыҡ көрәшендә уға тиңләшерҙәй ҡәүемдәр аҙ булған. Ҡурай моңдарын, иҫ киткес моңло йырҙарын тыңлап, үҙенең үткәне менән ғорурланып йәшәй торғас, был халыҡ бер ваҡыт иҙерәй, элекке булмышы юғала, хәтере ҡорой, милли ғорурлығы һына башлаған.

Сал Урал был күренешкә борсолоп, халыҡ хәтерен, әүлиәләр рухын кәңәш-ҡорға йыйған. "Ҡайҙан табырға халыҡтың милли аңын уятырлыҡ, быуаттан-быуатҡа күсә килгән быуындар бәйләнешен дауам итерлек көстө?" тип оҙаҡ уйланған улар. Һәм, ниһайәт, юлын тапҡандар: халыҡ рухын һуғарыусы инеш - ил һүҙен ташҡа баҫып сығарыр баҫма булдырырға, тигән ҡарарға килгәндәр. Уның исеме, әйҙә, "Киске Өфө" булһын, тиешкәндәр. Был гәзиттә барыһы ла - башҡорт халҡының тормош фәлсәфәһе, данлы үткәне, киләсәккә өмөтө, гүзәллекте аңлау ҡеүәһе тупланһын, тигәндәр.

Инде тиҫтә йыл был баҫма халыҡ күңеленә уртлам тереһыу бөркә, иман бирә, рух һала. Ошо бурысты иңенән төшөрмәй, тағы ла оҙағыраҡ хеҙмәт итһен халҡына "Киске Өфө"!

**Нурия ҠУНЫСБАЕВА.**
**Ейәнсура районы.**

10 йыл Киске Өфө



✓ *Ситтән килгән ҡунаҡтар бит иң тәүҙә ҡаланың тышҡы йөҙөнә, биҙәлешенә иғтибар итә. Шуға күрә лә Өфө ҡалаһының милли колоритын булдырыуы буйынса фекерҙәр туплап, ошо йүнәлештә эш алып барылһын ине.*



ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# УРМАНДА ҮҪКӘНДЕ ЛӘ... табышҡа әйләндереп була



**"Әйҙә, аҡса эшләйек!" рубрикаһында баҫылып килгән хаттарҙы ҡыҙыҡһынып уҡып барам һәм Архангель районының Әйтмәмбәт ауылы "эшҡыуарҙары" хаҡында ла яҙырға булдым.**

Колхоз-совхоздар бөтөрөлгәс, ауыл халҡы башлыса үҙ ихатаһында аҫыраған мал-тыуары, баҡсаһында үҫтергән йәшелсә-емеше менән көн күрә. Ә беҙҙең ауыл ҡатын-ҡыҙҙары иһә ғаиләһенә килем килтерерҙәй өҫтәмә шөғөлдәр ҙә таба.

Мәсәлән, ҡарҙар иреп, көндәр бер аҙ йылынғас, урманда яҙғы бәшмәктәр баш ҡалҡыта. Унан инде ҡайын, ер, ҡурай еләктәре бешә, муйыл өлгөрә. Көҙгә ҡарай тағы ла бәшмәк осоро башлана һәм ҡар яуғанға тиклем дауам итә. Шулай уҡ көҙөн урманда балан һәм гөлйемеш тә бешеп етә. Уңған хужабикәләр, тәбиғәт биргән байлыҡты йыйып, Өфө баҙарына алып барып һата. Шулай иртә яҙҙан ҡара көҙгә тиклем ауылыбыҙ ҡатын-ҡыҙҙары аҡса эшләй. Уларға балалары ла ярҙам итә.

Ошондай ғаилә бюджетына өҫтәмә килем килтереү маҡсатында алып барылған "эшҡыуарлыҡ" баҡса ултыртыу, мал-тыуар ҡарау, бесән әҙерләү һәм башҡа күп төрлө эштәр менән бер рәттән башҡарыла.

Шулай уҡ күҙгә ташланған тағы ла бер үҙенсәлек: ул да булһа, еләк-емеш, бәшмәк һатыу менән, ни өсөндөр, беҙҙең ауыл ҡатын-ҡыҙҙары ғына шөғөлләнә, ә күрше ауылдыҡылар иһә быны үҙ итмәй. Шуға күрә, ауылдаштарыма "Афарин!" тип әйтергә генә ҡала, сөнки "Шунса емеш-еләк йыйып һаттым, шунса аҡса эшләнем", тип әйтеүе генә еңел, ә битҡулдарҙы сыйҙырып, йәрәхәтләп, урманҡырҙар гиҙеү, күгәүен-серәкәйҙән тешләнеп, эҫе ҡояш аҫтында һыуһап-сарсап еләк-емеш йыйыуҙары еңелдән түгел.

Аллаға шөкөр, тәбиғәтебеҙ бик бай: урман-тауҙар тулып еләк-емеш уңа, таҙа, мул һыулы йылғаларҙа балығы йөҙә, сабынлыҡтарҙа емерелеп бесәне үҫә. Тәбиғәт биргән муллыҡты файҙаланып, барыһына шөкөр итеп донъя көтә ауылдаштарым. Һеҙ ҙә шулай итегеҙ, тип әйткем килә башҡаларға ла.

**Гөлкәй ХИСАМОВА.**
**Архангел районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Буласаҡ ил Президентының, төрлө кимәлдәге депутаттар корпустары әһелдәренең төп кешелек сифаттары ниндәй булырға тейеш, тип уйлайһығыҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Мөхәмәт ҒАРИПОВ, хеҙмәт ветераны:*** Буласаҡ ил Президенты әйткән һүҙендә тора белгән, иленә, халҡына тоғро, намыҫлы шәхес булырға тейеш, тип уйлайым. Һайлау алды бәйгеһендә ҡыҙып китеп алтын тауҙар вәғәҙә итеүселәр ҙә була, үкенескә күрә, тик халыҡтың да хәҙер ярайһы ғына күҙе асылды, шөкөр. Тормошҡа ашмаҫтай вәғәҙәләрҙе ул шундуҡ тотоп ала. Шуға күрә булмаҫтайҙы тылҡыған кандидаттарҙың халыҡ күҙенән төшөп ҡала барыуы хәйерлерәк. Ил президентлығына кандидаттарҙың һайлау алды программаларын өйрәнгәндә мин иң тәүҙә илебеҙ именлеген һәм бөтөнлөгөн тәьмин итеү буйынса күреләсәк саралар пункттарын эҙләйем. Шуларҙың араһында "Рәсәй Федерацияһының аҙ һанлы аҫаба халыҡтарының үҫеше өсөн шарттар булдырыу" тигән бөләкәй генә һөйләм йөрәгемә майҙай яғылды. Тик әлеге лә баяғы - вәғәҙәнең ҡоро һүҙ булып ҡалыуы ла бик ихтимал, шуға күрә иң тәүҙә кандидаттарҙың үҙҙәренең кешелек сифаттарына, үҙ-үҙҙәрен тотошона, ҡылған ғәмәлдәренә, бынан алдараҡ һөйләгән хәбәрҙәренә лә ҡарарға һәм шунан ғына ныҡлы ҡарарға килергә кәрәк. Булдыҡлы, тыңғыһыҙ, намыҫлы һәм илһөйәрлек сифаттары менән айырылып торған шәхес өсөн тауыш бирәйек, тим.

4 мартта шулай уҡ Өфө ҡала Советы депутаттарын да һайлаясаҡбыҙ, шуға ошо мәсьәләгә лә туҡталып үтәйем. Гәрсә Өфөлә тыуып үҫмәһәм дә, ғүмеремдең өстән ике өлөшө, йәғни 40 йылдан ашыу хәҙер Өфөлә йәшәйем, ул минең тыуған ҡалама әүерелде, мин уның башҡа берәй ерҙә йәшәүемде күҙ алдыма ла килтерә алмайым. Өҙөлөп яратам мин Өфөмдө! Шуға күрә лә мин уның киләсәгенә битараф ҡала алмайым. Ә уның киләсәге туранан-тура ҡала башлыҡтарының һәм уның ярҙамсылары - ҡала Советы депутаттарының кешелек сифаттарына бәйле. Башлыҡ менән, шөкөр, мәсьәлә унай хәл ителде: йәш, эшлекле белгес һәм баш ҡала тормошо менән һәр йәһәттән хәбәрҙар етәксе килде. Ҡала Советы депутаттары итеп тә беҙ тап ана шундай сифаттарға эйә булған кешеләрҙе һайларға тейешбеҙ. Иң мөһиме - улар халыҡтан өҫтөн түгел, ә уға яҡын торһондар, йәғни баш ҡала халҡын борсоған мәсьәләләргә йөҙ тотҡан, ҡала хужалығын яҡшы белгән намыҫлы, эшсән кешеләрҙе күргә килә улар сафында. Баш ҡалабыҙҙы, тимәк, Башҡортостаныбыҙҙы донъя кимәлендә билдәлелек аларҙай бейеклеккә алып сығырлыҡ, булдыҡлы патриоттарҙы күргә килә ҡала депутаттары йөҙөндә. Өфөбеҙҙә меңәрләгән башҡа ҡалаларҙан үҙ милли йөҙө булған гүзәл, шул уҡ ваҡытта башҡа мегаполистарҙан ҡалышмаған ҡеүәтле ҡала итеү маҡсаты тора. Ситтән килгән ҡунаҡтар бит иң тәүҙә ҡаланың тышҡы йөҙөнә, биҙәлешенә иғтибар итә. Шуға күрә лә Өфө ҡалаһының милли колоритын булдырыу буйынса фекерҙәр туплап, ошо йүнәлештә эш алып барылһын ине. Ҡала Советына депутатлыҡҡа кандидаттар араһында төрлө кешеләр бар. Улар араһында депутат мандатын үҙ мәнфәғәттәрен хәл итеүсе файҙалы "кенәгә" итеп күреүселәр ҙә, сәйәси лозунгылар ҡысҡырып, теге йәки был фирҡә файҙаһын ҡайғыртыусылар ҙа бар, ләкин ҡала Советына сәйәсмәндәр ҙә, "түрә-депутаттар"ҙа, почетлы президиум ағзалары ла түгел, ә аныҡ эштәр башҡарыуға ниәтләнгән профессионалдар, яңы фекерле һәм киң ҡарашлы хужасыл шәхестәр кәрәк. Улар үҙҙәренең Өфөнө ысынлап та яратыуҙары, кеселекле һәм кешелекле, намыҫлы сифаттары менән айырылып торһондар.

***Урал МОСТАФИН, яҙыусы:*** Ил Президенты - тимәк, илдә төп хужа. Ә хужа ниндәй - ил шундай. Президенттың, минеңсә, эше лә, һүҙе лә бер булырға тейеш. Вәғәҙә бирҙеңме - үтә, ә үтәй алмаҫлыҡ вәғәҙәне бирмә. Илдәге хәлдәр менән хәбәрҙар булһын, ярҙамсылары һүҙенә генә ышанмаһын, халыҡ араһына сығып, аралашып, хәлде үҙе күреп-белеп торһон. Икенсе яҡтан, тағы ла гел халыҡ араһында булам, тип, үтә ваҡланып китеү ҙә килешмәй. Тағы бер мөһим сифат - ул ҡатылыҡ һәм ҡәтғилек (ыңғай мәғәнәлә, әлбиттә). Бының менән ни әйтмәксемен? Бай ҡатламдарҙан һалым түләтеү күләмен арттырыу мәсьәләһе күпме сәйнәлеп килә, ә хәл ителмәй. Халыҡтың, бигерәк тә уҡыусы балаларҙың, студенттарҙың йыл да берәй сюрприз менән башын ҡатырып, аңҡы-тиңке итеүсе мәғариф министры Фурсенконы халыҡ күптән эштән ебәреү яғында булһа ла, ул һаман креслоһында ҡала килә. Быны ошоноң кеүек миҫалдарға урын булмаҫҡа тейеш.

Ҡатылыҡ, тигәндән, был коррупция, уғрылыҡҡа фашланған чиновниктарҙың башынан һыйпап тороуға ла ҡала. Ғәйепле икән, тимәк, ул - енәйәтсе, ә енәйәтсенең урыны - төрмә. Хәҙер беҙҙә, киреһенсә, нисек тә күберәк енәйәтсене төрмәнән сығарыу яйы ҡарала. Был принципһыҙлыҡмы, әллә ил хужаһына популярлыҡ өҫтәмәүсе башҡа берәй ғәләмәтме? Һәр енәйәт үҙ язаһын алырға тейеш.

Ныҡлыҡ, тигәндән, туҡтауһыҙ хаҡтар артыуы шулай уҡ ил хужаһы файҙаһына түгел бит. Хаҡтар сәйәсәтенә сик ҡуйыу - ана шул ныҡлыҡ ҡына түгел, ә хужасыллыҡ, халыҡ мәнфәғәтен хәстәрләү, кешелеклелек, намыҫлылыҡ кеүек сифаттар тураһында һөйләр ине.

Урындарҙағы депутаттар, атап әйткәндә, бигерәк тә Өфө ҡала Советы депутаттарына ла ошо уҡ сифаттар хас булырға тейеш, сөнки, халыҡ әйтмешләй, оло йортта ни ҡылынһа - кеселендә лә шул булыр.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

## МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

Гәзитебеҙҙе йыл да алдырған, уға ваҡытында яҙылған, уны аҙна һайын ҡәҙерле ҡунағылай көтөп алған тоғро уҡыусыларыбыҙ барлығын беләбеҙ һәм улар иғтибарына шуны еткерәбеҙ: февраль-март айҙарында 2012 йылдың тәүге яртыһындағы хаҡ менән **(348 һум 24 тин)** 2012 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып буласаҡ. **Һеҙҙе бер аҙ дәртләндереү өсөн шундай тәҡдим: февраль айында гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән ике уҡыусыбыҙ башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим" китабына эйә буласаҡ.** Бәхетегеҙҙе һынап ҡарағыҙ ҡана!

**Һәм тағы.** Эргә-тирәгеҙҙә, таныш-тоноштарығыҙ араһында теге йәки был сәбәп арҡаһында гәзиткә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар ҙа барҙыр. Уларҙы иҫкәртегеҙсе: 17 мартҡа тиклем яҙылһалар, апрелдән өйҙәренә тағы килә башлар "Киске Өфө". Индексы - 50665. Өс айға яҙылыу хаҡы - 174 һум 12 тин.

**Әйткәндәй,** почталар менән гәзиткә яҙҙырыу һәм гәзитте өйҙәргә килтереү буйынса аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуһа, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итергә онотмағыҙ.

Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru, kiskeufa@ufacom.ru**, беҙҙең сайт: **kiskeufa.ru**, блог: **blog.kiskeufa.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Өфөлә социаль торлаҡ төҙөлә башлаясаҡ. Был хаҡта Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов "Вся Уфа" телеканалында "тура бәйләнеш" барышында хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, муниципаль йәки республика бюджеттары иҫәбенә бюджет өлкәһендә эшләүсе хеҙмәткәрҙәр өсөн социаль торлаҡ төҙәләсәк. Файҙаланыуға ул бушлай тапшырыласаҡ. Кеше билдәле бер өлкәлә, мәҫәлән, мәғариф йәки һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә эшләгән осорҙа фатир уныҡы тип иҫәпләнәсәк.

✓Башҡортостандың яңы эш башлаған фермерҙары эҙмә-эҙлекле ярҙам аласаҡ. Быйылдан башлап крәҫтиән-фермер хужалыҡтары ойоштороуға гранттар биреү, хужалыҡ ихтыяждарына, инженерлыҡ инфраструктураһына, ерҙе рәсмиләштереүгә бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам күрһәтеү ҡаралған. Был хаҡта фермерҙар менән осрашыуҙа БР Ауыл хужалығы министры Эрнст Исаев белдерҙе. Ул фермерҙарҙы иҡтисади йәһәттән әһәмиәтле төбәк программаларында ҡатнашырға саҡырҙы. Республикала ғаилә фермаларын үҫтереүгә лә иҫәп тоталар. Шуның менән бер рәттән "500 ферма" проектын тормошҡа ашыра башлағандар. Бөгөн республикала 4,5 меңдән ашыу крәҫтиән-фермер хужалығы, әллә күпме шәхси эшҡыуар бар. 600 мең самаһы шәхси ярҙамсы хужалыҡ иҫәпләнә, уларҙа төбәктәге ауыл хужалығы продукцияһының өстән ике өлөшө етештерелә.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев төбәктең мәктәп уҡыусылары менән осрашты. Башҡортостандың биш районынан (Кушнаренко, Өфө, Ҡырмыҫҡалы, Иглин, Шишмә) 70-тән ашыу уҡыусы парламенттың пленар ултырышында ҡатнашты. Константин Толкачев мәктәп уҡыусыларына Башҡортостанда закондар сығарыу органын булдырыу тарихы, уның үҫеше һәм камиллаштырылыуы тураһында һөйләне. Артабан аралашыу "һорау-яуап" форматында үтте. Бер сәғәт дауамында Константин Толкачев 20-гә яҡын һорауға яуап бирҙе.

✓РФ Мәғариф һәм фән министрлығы менән Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте араһында тейешле килешеүгә ҡул ҡуйылды. Уға ярашлы, 2012 йылда Башҡортостандың дөйөм белем биреү системаһын яңыртыу буйынса сараларға федераль үҙәк 2 миллиард 133 миллион һум аҡса бүләсәк. Быйыл республика 121 мәктәптә капиталь ремонт үткәреүгә 507,4 миллион һум күләмендә аҡса аласаҡ.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# БАРҘЫМ ӘЛЕ БАҘАРҒА...

**Ысынлап та, ниндәй ғәләмәт һуң был баҙар тигәндәре? Унда ниндәй ҡануниндар хөкөм һөрә? Улар кем өсөн ойошторола һәм кемдәргә хеҙмәт итә? Халыҡ мәнфәғәтенә, тиһеңме? Әллә инде...**



Бер мәл Магнит ҡалаһына барҙыҡ та баҙарына инеп сығырға булдыҡ. Иптәштәремә, мунсанан һуң кейергә минә халат алығыҙ, тип аҡса бирҙем дә үҙем машинала тороп ҡалдым. Байтаҡ йөрөп килделәр былар. Берәүһенең ҡулында алһыу төҫтәге төргәк тә бар. Халат булмағандыр ҙа, ҡалын таҫтамал алғандарҙыр, тип уйлайым. Иптәшем ҡыйыуһыҙ ғына итеп минә төргәген һуҙа.

- Нимә ул, ҡана, асып ҡарайыҡ әле, - тип тағатып ебәрһәм, халат имеш! Бер ҡарауҙан уҡ үлсәме бәләкәй, үҙе ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы икәне күренеп тора.

- Ә минә халат алманығыҙмы ни? - тип, тауыш ҡуптармай ғына һорайым. Бәлки, ирҙәр халаты булмағандыр, ә был нәмәне иптәшем үҙенең ҡатынына алғандыр.

- Һинә алдыҡ беҙ был халатты. Һәйбәт тә инде! - тимәһенме тегеләр.

- Кит, юкты һөйләмәгеҙ, был бит бисәләр халаты: үҙе алһыу төҫтә, үҙе бәләкәй генә, - һаман да шаярталарҙыр былар мине тип уйлайым.

- Юҡ, ысынлап та һинә тип алдыҡ был халатты, - тип күҙҙәрен йәшерәләр.

- Башҡаһы, ирҙәрҙеке булманымы ни?

- Булғандыр, беҙ ошоно алдыҡ та ҡуйҙыҡ.

- Аңламайым. Һеҙгә әллә быны бушлай бирҙеләрме?

- Юҡ. Бер һатыусыға барып, ирҙәр халаты кәрәк, тигәйнек, ул беҙгә ошоно һатты.

- Нисек инде, һатты? Һеҙ аҡса түләп һатып алманығыҙмы ни? Әллә йыһып һалып, аҡсағыҙҙы талап алдымы ул һатыусы?

- Юҡ. Еңгә йәбеште лә, һатып алығыҙ, тип арттан ҡалмай ҙа ҡуя...

- Шунан?

-Бөтә кеше алдында һатыулашып йөрөүе оят булды, алдыҡ та ҡуйҙыҡ инде...

- Тауарын көсләп һатырға тырышҡан кешегә оят түгел, һеҙгә оят булдымы?

- Ул бит тажик ине! Һағыҙаҡ һымаҡ йәбеште лә ҡуйҙы...

- Булһа һуң? Йәбешһә һуң? Тажикка үҙенә кәрәкмәгәнде көсләп һатырға була, ә башҡортҡа үҙенә кәрәкмәгәндән баш тартырға ярамаймы? Бар, алып барып, битенә бәрегеҙ! Аҡсаһын бирмәһә лә, кәрәкмәй минә былдай халат...

Иптәштәремдең мәшәүләктәренә йәнем көйөп, ғәрләнеп, һөйләндем, туҙындым. Һатыусы эргәһенә кире барманылар, үҙҙәренең хаҡлығын яҡларға ла ҡыйыулыҡтары етмәне. Ошо бәләкәй генә тормош күренешендә беҙҙең халыҡтың мәшәүлектең сигенә еткән баҫалҡылығы, бер нисек тә аҡланмаған күндәмлеге ярылып ята түгелме?..

...Бөтә илдәрҙә лә баҙар - ул кеше үҙе етештергән, үҙе үҫтергән тауарҙы һатыу урыны. Беҙҙә иһә баҙар - кешене алдау урыны. Беҙҙең баҙарҙа ла үҙе үҫтергән, үҙе етештергәнде һатыр ине кеше, әммә унда "алыпһатарҙар" хужа. Йүнле баҙарҙа һатыусы менән һатып алыусы туранан-тура һөйләшеү, килешеү буйынса тауарҙың хаҡын билдәләй. Беҙҙең баҙарҙа тауар хаҡы буйынса даулашып буламы? Юҡ, хаҡтар алдан билдәләнгән. Әгәр бер һатыусы хаҡты үҙгәртһә тиһә, уны баҙарҙан ҡыуып сығаралар. Үҙ тауарын үҙе һатам тип ныҡышҡандар ҙа бар, әлбиттә, ләкин уларға иң насар урындар ҡала йә башлыса баҙар ҡапҡаһы тышында һатыу итергә мәжбүрҙәр. Баҙарҙа намыҫлы һатыусы ла, һатып алыусы ла хоҡуҡһыҙ. Дөрөҫөн генә әйткәндә, кем бөгөн, баҙарҙан отоп ҡайттым әле, тип маҡтана ала? Баҙарҙа беҙ бөтбеҙ ҙә отолабыҙ! Ә баҙар ҡанундары алдаҡҡа нигеҙләнеп, бер яҡтың ғына отошон тәьмин итә торған урын булырға тейеш түгел. Ундай принципта эшләгән баҙар ысын баҙар булып иҫәпләнә алмай!

Ҡәҙимгә ҡала баҙары һатыусыларға бирелгән урындар өсөн алынған табышҡа йәшәй, үҫә, киңәйә. Баҙар хужаһы эшсеһенә эш хаҡы түләй, биналар төҙөй, яңы урындар булдыра. Рәсәй 140 миллион һатып алыусыһы булған баҙарының ишектәрен бөтә донъяға шар асты. Ил баҙарында урын өсөн түләү тәртибе тупаҫ боҙола: тауарҙарҙың 50 проценты (иң кәмендә!) түләүһеҙ индерелгән контрабанда. Рәсәйҙә бөгөн дә контрабанда тауарҙар менән һатыу иткән 86-лап баҙар эшләй. Уларҙың "ҡыйыҡтары" шул хәтлем ныҡ, уларға ел-ямғыр ҙа теймәй, тыйыусылар ҙа юҡ. Контрабанда юлы менән ингән тауар өсөн килем, дәүләт кассаларын урап үтеп, бер төркөм кешеләрҙең кеҫәләренә төшә. Закон һаҡлау органдары бәлә, күрә тороп та тәртип булдырырға ашыҡмай, ил кеҫәһенән урланған табыштан хатта үҙҙәренә лә өлөш сығарыуға өлгәшә.

Бөгөн ҡайһы төбәктең ниндәй баҙарына, магазинына инһәң дә, һатыуҙағы тауарҙарҙың иң кәмендә яртыһы - Ҡытайҙыҡы! Тағы ла 20-30 проценты - күрше өлкәләрҙән. Үҙебеҙҙең тауар, аҙыҡ-түлек өлөшөнә 30-20 процент ҡына ҡала. Шунан һуң, оялмайынса, нисек, эшләп ашайбыҙ, тип әйтмәк кәрәк! Ярай, ҡатмарлы электр тауарҙары, хәтәр эш ҡоралдары етештерә алмайбыҙ икән, ти, ә ябай өй кәрәк-ярақтары, хужалыҡ инстументтарын үҙебеҙ эшләп ҡулланыр һәләтебеҙ ҙә юҡмы? Яҫтыҡ, юрған тыштары, таҫтамал, күлдәк, майка, өҫ, аяҡ кейемдәре тегеп кейә лә белмәйбеҙме? Ситтән ташып ашарға, сит ил тауарҙары һатып алып, "еңел" йәшәргә мәжбүрбеҙ, сөнки завод, фабрикаларҙы ябып, һатып бөтөүгә үҙебеҙ юл ҡуйҙыҡ. Хәҙер ул донъяны емереүселәрҙе демократтар тип атайбыҙ, улар йыйы урындарҙа үҙ мәнфәғәттәрен хәстәрләүҙе дауам итә.

Барыһына ла беҙ үҙебеҙ ғәйепле. Талапсанлыҡ күрһәтмәгәнгә, шөҡәтһеҙ тауарҙар, сифатһыҙ аҙыҡ-түлек килтереп һаталар беҙгә. Ҡайҙалыр мөрәжәғәт итеп, ғәҙеллек табыуҙан төңөлгәнбеҙ. Үҙ хоҡуҡтарыбыҙҙы күптәребеҙ белмәй, белгәндәрен дә яҡлауҙан тыйылабыҙ, хаҡлы булһаҡ та дәғүәләшергә, үҙебеҙҙең хаҡикәтте иҫбат итергә тартынабыҙ, оялабыҙ, шуға күрә беҙҙең менән иҫәпләшергә лә теләмәйҙәр. Беҙ - ихтыярһыҙ хоҡуҡи назандар: нимә "һоғондоралар", бөтәһен дә һуҙһеҙ "йотабыҙ"!

*Барҙым әле баҙарға,*
*Затлы әйбер һайларға.*
*Ҡытай ыштаны алдым,*
*Оятҡа ғына ҡалдым...*

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Әтәс кенә, мин ҡысҡырып таң аттырам, тип уйлай. Уға ҡысҡырыуы ғына шарт: таң атамы, атмаймы- барыбер! Яҙған кеше улай уйламай! Яҙған кеше үҙенең фекерҙәрен башҡаларҙыҡы менән сағыштырғыны, тикшерәһе, асыҡлайһы, теүәлләйһе килә. Ләкин беҙ, тормошобоҙҙа барған үҙгәреш, хәл-ваҡиғаларға ғына түгел, уҡығандарға ла битараф. Һаман да әүәлгесә, ҡайҙа ҡыуалар, шунда башыбыҙҙы эйеп, өнһөҙ генә бара бирәбеҙ, сөнки өркәккә әйләнеп бөткәнбеҙ. Ҡыйыуыраҡтар килеп сыҡһа, нимә ҡыла алыр икән, тип ситтән генә күҙәтергә яратабыҙ. Ниндәй яҙа алыр икән, тип үсәйбеҙ хатта...Чернышевскийҙың "Что делать" тип яҙғанына күпме ғүмер уҙған, океан һыуҙар аҡҡан, әммә Рәсәйҙә хәҙер ҙә шул уҡ юлдар һәм шул уҡ бурҙар... Халыҡ зарлана, халыҡ ялбара, ләкин хужалар ул ауаздарға битараф. Сөнки беҙ үҙебеҙ ҙә битараф бит. Ә иламаған балаға имсәк ҡаптырмайҙар...**

**Яҡшылыҡҡа өндәгәндә лә ҡаршылыҡҡа осраусың ихтимал икәнен белә тороп,**
**Урал МОСТАФИН.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓27-28 февралдә Өфөлә Бөтә Рәсәй аграр форумы үтәсәк. Форумдың пленар ултырышында һәм секцияларында аграр тематикаға бәйле барлыҡ мәсьәләләр ҙә тикшереләсәк. Был, Рәсәйҙең Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына инеүен иҫәптә тотоп, илдең агросәнәғәт комплексын артабан үҫтереү юлдары, ауыл хужалығы производствоһының ҡайһы бер тармаҡтарына дәүләт ярҙамы күрһәтеү саралары, ауылды социаль йәһәттән үҫтереү һәм урындағы үҙидаралыҡ проблемалары.

✓Башҡортостанда булдырылған 3509 һайлау участкаһының 42-һендә веб-камералар булмаясаҡ. Был хаҡта техник видеокүҙәтеү саралары эше менән таныштырыу барышында Башҡортостан Республикаһының Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев хәбәр итте. "Башҡортостанда 3509 һайлау участкаһы булдырылды, - тине ул. - Тауыш биреү урындарын веб-камералар менән йыһазландырыу алдағы һайлауҙарҙа ҡулланыласаҡ яңы бер сара булып тора. Видеокүҙәтеү саралары 3467 участкала урынлаштырылған".

✓Өфөгә Кувейт дәүләтенең ике вәкиле - "Аль-Васатыйя" халыҡ-ара үҙәгенең бүлек директоры доктор Салем Аль-Байануни һәм шәйех Джафар Аль-Хаддад килде. Ҡунаҡтар Башҡортостанға М. Солтанова исемендәге Ислам колледжы директоры Илдар Малахов тәҡдиме менән Рәсәйҙең "Аль-Васатыйя" фәнни-ағартыу үҙәге (Мәскәү) директоры Вячеслав Али Полосин саҡырыуы буйынса килде. Ислам фәндәре өлкәһендәге белгестәр аҙна дауамында лекциялар уҡый, Өфө вуздарында асыҡ дәрестәр үткәрә, Башҡортостан мәсет һәм мәҙрәсәләрендә сығыш яһай.

✓БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа Һаулыҡ һаҡлау ойошмалары ассамблеяһының тәүге ултырышы үтте. Яңы йәмәғәт ойошмаһы профессиональ берләшмәнең мәнфәғәттәрен яҡлау, һаулыҡ һаҡлауға ҡағылышлы закондарҙы тикшереүҙә әүҙем ҡатнашыу, тармаҡ эшмәкәрлеге сифатын һәм табиптарҙың эшләү шарттарын яҡшыртыу буйынса тәҡдимдәр булдырыу маҡсатында ойошторолған.

✓Өфө дәүләт авиация техник университетының "Авангард" студенттар йөронда Ватанды һаҡлаусылар көнө алдынан "Йәгеҙ әле, егеттәр!" хәрби-спорт конкурсы үтте. БР Президенты Рөстәм Хәмитов сараның хөрмәтле ҡунағы булды. Иң яҡшылар исеменә һигеҙ команда көс һынашты. Күп төрлө һынауҙар аша үтеп, һөҙөмтәлә Хәрби уҡытыу үҙәге командаһы енеүсе булды.

✓ *Бөгөнгө дәреслектәрҙең етешһеҙ яҡтарын билдәләгәндә, грамматик ҡағиҙәләргә, теорияға күп урын бүленеүен атап үтергә була. Уҡытыусыларҙың күбеһе әйтмешләй, балаларҙың телмәрен үҫтереүгә бөгөн төп иғтибар бүлергә кәрәк.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БЕҘ БӘХЕТЛЕ:
## туған тел көнөн билдәләй алабыҙ

**ЮНЕСКО ойошмаһы тарафынан 21 февраль Халыҡ-ара туған тел көнө тип иғлан ителгән. Ошо иҫтәлекле көндө билдәләп, баш ҡалабыҙҙа тәүге тапҡыр ҙур мәҙәни сара ойошторолдо. "Нефтсе" мәҙәниәт һарайына башҡорт телен үҫтереүгә, яҡлауға күп көс һалған зыялылар, йәмәғәт эшмәкәрҙәре, туған теленә битараф булмаған уҡыусылар, йәштәр йыйылды.**

Туған телдәрҙе һаҡлап ҡалыу республикабыҙҙа ғына түгел, бөтөн донъяла ҙур проблема булып тора. Ер шарында көн һайын ике тел юҡҡа сығып тора, тиҙәр. ЮНЕСКО башҡорт телен дә "Ҡыҙыл китап"ҡа индергән. Шуға күрә телебеҙҙе һаҡлауға бәйле сараларҙың барыһы ла, шул иҫәптән туған тел көнөн билдәләү ҙә бик әһәмиәтле.

- Туған тел байрамына йыйыла алғанбыҙ икән, тимәк, беҙ - бәхетле халыҡ, - тине байрам тантанаһында сығыш яһап Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев. - Донъяла йылына бер нисә тиҫтә тел юҡҡа сыға. Киләһе йылдың ошо көнөндә байтаҡ халыҡтар үҙҙәренең туған тел байрамын билдәләй алмаясаҡ. Милләт өсөн бынан да ҙур фажиғәне күҙ алдына килтереүе ҡыйын. Ә беҙ йәштәребеҙ, сабыйҙарыбыҙ менән бергәләшеп ошо көндө билдәләйбеҙ икән, тимәк, киләсәгебеҙ өмөтлө. Әлбиттә, туған телгә төрлө бәләләр янап торғанда, ауылдарҙа мәктәптәр ябылғанда, уны һаҡлауы еңел түгел. Бының өсөн ҙур тырышлыҡ, берҙәмлек, уяулыҡ талап ителә. Уңыштарға өлгәшеүе ауыр, әммә уларҙы һаҡлап алып ҡалыуы тағы ла ҡыйыныраҡ. Шуға күрә булғанды ҡәҙерләй беләйек...

Ысынлап та, башҡорт теленең киләсәге өмөтлө булыуын ошо байрам кисәһе дәлилләп торҙо кеүек. Тамашасылар сәхнәнән күңелдәрҙе күтәреп ебәрерлек һүҙҙәр көттө. Һәм ул һүҙҙәрҙе халҡыбыҙҙың рухын тотоп торған күренекле шағирҙарыбыҙ әйтте. Тамашасылар йөрәктәргә оҫҡон һалырлыҡ йырбейеүҙәр күреп-ишетергә теләгәйне. Һәм иң сағыу сығыштар менән талантлы балалар, танылған артистар улар  алдына сыҡты. Тамашасылар сәхнәнән йәнле телдәй тәбиғилек, зауыҡ, матурлыҡ һәм ихласлыҡ йоҡтороп алып ҡайтырға өмөтләнгәйне. Был өмөт тә аҡланды: ойоштороусыларҙың туған телгә эскерһеҙ һөйөүе, ғорурлығы, уны һаҡлар һәм яҡлар фиҙаҡәрлеге халыҡ күңеленә лә күсте.

Балаларҙа башҡорт теленә ҡыҙыҡһыныуҙы нисек уятырға, тигән һорауға "Арғымаҡ" фольк-рок төркөмө яуап бирҙе кеүек. Заманса тауыш менән боронғолоҡ ауазын еткерә алған төркөм һуңғы рәттәрҙә бер ни тиклем бойоғоп ултырған йәш быуындың күңелен ашҡындырып ебәрҙе. Йәштәргә нимә кәрәк? Экспрессия, геройлыҡ, романтика. "Арғымаҡ" ошо тойғоларҙы уята һәм күңелдәргә тапшыра ала. Бер алымы бар төркөмдөң. Ул да булһа, шаманлыҡ. Һуҡма ҡоралдар менән шаманлыҡ ысулын файҙаланып, музыканттар йәштәрҙе үҙ тулҡынына көйләй һәм буйһондора. "Арғымаҡ"тар ошо кисәлә изге маҡсаттарына өлгәште, тип әйтергә була.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт теле ҡеүәтле әле, тигән тойғо менән ҡайтты тамашасы кисәнән. Туған тел көнөн билдәләүгә матур башланғыс һалынды. Ошо көндө йыл да байрам итергә яҙһын.**

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТУҒАН ТЕЛ ДӘ КӘРӘКЛЕГЕН...
## ата-әсәгә нисек аңлатырға?

**Өфө ҡала мәҙәниәт һарайында "Башҡортостандың баш ҡалаһы йыл уҡытыусыһы - 2012" педагогик оҫталыҡ конкурсын ябыу тантанаһы үтте. Өфөнөң иң көслө уҡытыусылары лауреат һәм еңеүсе исемдәрен алды.**



Уҡытыусылар араһындағы һөнәри конкурс быйыл 15-се тапҡыр уҙғарылды. Беренсе турҙа педагогтар үҙ инновацион проектын әҙерләне, дәрестәр һәм класс сәғәттәре үткәрҙе, жюри һорауҙарына яуап бирҙе. Икенсе турҙа уҡытыусылар һөнәри кимәлен күрһәтеп, мастер-кластар, лекциялар үткәрҙе. Быйылғы конкурста 52 уҡытыусы ҡатнашты. Башҡорт, татар, рус телдәре һәм әҙәбиәттәре, шулай уҡ физкультура уҡытыусылары араһында ла иң яҡшылар билдәләнде. Бынан тыш, өҫтәмә белем биреү педагогтары, мәктәпкәсә белем биреү учреждениелары араһында номинациялар еңеүселәре булды. "Уҡытыусының иң яҡшы интернет-проекты" номинацияһы быйылғы конкурстың яңылығы булды. Унда педагогтар үҙ эшмәкәрлегендә информацион технологияларҙы ҡулланыу буйынса һөнәри кимәлен күрһәтә алды.

Туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары бәйгеһе һәм конкурстың бер этабы булып торған фекер алышыу - дебаттар ваҡытында байтаҡ көнүҙәк мәсьәләләр яңынан ҡалҡып сыҡты. Бына, мәҫәлән, туған телдәрҙе уҡытыу кәрәклеген ата-әсәләргә нисек аңлатырға, тигән һорау борсой бөгөн уҡытыусыларыбыҙҙы. Конкурста ҡатнашҡан педагогтар үҙ тәжрибәләре менән уртаҡлашып, быны хәл итеү юлдарын асыҡларға тырышты. Синыф етәкселәре генә түгел, уҡытыусылар ҙа үҙ фәне буйынса ата-әсәләр йыйылышы үткәреп торорға тейеш, тигән фекер яңғыраны. Бының менән туған тел уҡытыусылары дәрестәренең кәрәклеген аңлатып, абруйын күтәреүгә өлгәшә алыр ине. Тағы бер юл - ата-әсәләргә асыҡ дәрестәр күрһәтеү. Әлбиттә, унда уҡыусыларҙың әүҙемлеген күрһәтергә кәрәк. Балалар шиғырҙар һөйләргә, йырларға, бейергә тейеш. Бынан һуң ата-әсәләрҙең күбеһе туған телдең әһәмиәтен, бәлки, аңлар ине. Әммә аңлатыуҙың ниндәй генә юлын һайлама, законға һылтанып эш итеү - иң ҙур дәлил булып тора. Шуға күрә иң тәүҙә башҡорт теле дәүләт теле булыуын, туған тел дәрестәре законға ярашлы үткәрелеүен аңлатырға кәрәк. Ошо фекерҙе конкурстың жюри ағзалары - абруйлы тел белгестәре лә һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Мәктәп етәкселәренең туған телдәргә ҡарата мөнәсәбәте үҙе бер проблема булып тора. Ҡайһы бер педагогтар белдереүенсә, бәғзе мәктәптәрҙә туған тел уҡытыусыларына "икеле" билдәһен ҡуйырға рөхсәт итмәйҙәр. Әлбиттә, баланың насар уҡыуының сәбәптәре төрлө булыуы мөмкин. Әммә нигеҙҙә барыһы ла уҡытыусынан тора. Уҡытыусы ғына баланың дәрескә ҡарата ҡыҙыҡһыныуын уята ала. Уҡыусы белем алыуға битараф, яҡшы билдәгә ынтылмай икән, тимәк, педагог ниҙер эшләп еткермәй, ҡайҙалыр хаталана. Конкурста ҡатнашыусылар ҙа ошо ҡарашты белдереп, туған тел уҡытыусыларына етәкселек менән бәхәскә инмәҫкә, ә үҙ өҫтөндә эшләп, һөнәри кимәлде үҫтерергә тәҡдим итә.

Дәреслектәргә ҡағылышлы проблема ла бар. Конкурстарҙа, әлбиттә, ижади ҡарашлы уҡытыусылар ҡатнаша. Шуға күрә күбеһе дәреслектең ярҙамсы ғына булыуын билдәләп, үҙ көстәренә таянып эш итеүен белдерҙе. Ысынлап та, белемле педагог дәреслектән иң кәрәкле, файҙалы мәғлүмәтте генә һайлап ала. Синыфтың кимәленә ҡарап, күнегеүҙәрҙе үҙе уйлап сығара. Шулай ҙа бөгөнгө дәреслектәрҙең етешһеҙ яҡтарын билдәләгәндә, грамматик ҡағиҙәләргә, теорияға күп урын бүленеүен атап үтергә була. Уҡытыусыларҙың күбеһе әйтмешләй, балаларҙың телмәрен үҫтереүгә бөгөн төп иғтибар бүлергә кәрәк. Шуға күрә уҡыу әсбаптарында лексик күнегеүҙәр ни тиклем күберәк урын алһа, шул тиклем отошлораҡ булыр ине, ти уҡытыусылар.

- Өфөләге башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының кимәле һуңғы йылдарҙа күҙгә күренерлек күтәрелде, - тип билдәләп китте филология фәндәре докторы, баһалама комиссияһы рәйестәше Мирас Иҙелбаев. - Был конкурстың тәүге йылдарында ҡала уҡытыусылары республика күләмендә призлы урындар алмай торғайны. Бөгөн башҡорт телен уҡытыуға мөнәсәбәт ыңғай яҡҡа үҙгәрҙе. Шуның арҡаһында уҡытыусыларҙың кимәле, белем биреү һөҙөмтәләре лә яҡшырҙы. Ҡала уҡытыусылары ике йыл рәттән республика конкурсында Гран-при алыуға өлгәште. Хәҙер Өфө педагогтары яңы маҡсат ҡуйырға тейеш. Уларҙың уҡыусылары юғары уҡыу йорттарының башҡорт бүлектәренә инһендәр ине. Бер нисә гимназия-лицей үҙ уҡыусыларын башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетына әҙерләп индерә, әлбиттә. Әммә беҙ башҡа мәктәптәрҙән дә абитуриенттар көтәбеҙ...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән белем биреүселәр араһында быйыл Октябрь районының  М. Исҡужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы уҡытыусыһы Миңдиниса Ғәзизуллина еңеп сыҡты. Уның әйтеүенсә, ҡала шарттарында туған телдәрҙе уҡытыуы күпкә ауырыраҡ. Ҡаланың милли мәктәптәренә лә хатта балалар телде белмәй килә. Шуға уҡыусыларҙы ҡыҙыҡһындырыр өсөн педагогтар һәр саҡ үҙенсәлекле алымдар менән эш итә. Һөҙөмтәлә ҡала уҡыусылары республика олимпиадаларында уңыштарға өлгәшә. "Дәрестәр гел уйындар менән үтә, балалар менән йомаҡ сисеп тә, йырлап та, бейеп тә алабыҙ. Шуныһы уңайлы - балаларҙы театр, музейҙарға йөрөтөү мөмкинлеге бар. Һәләтле уҡыусылар менән өҫтәмә рәүештә эшләйбеҙ, -ти Миңдиниса Ғәзизуллина. - Туған телдәрҙе уҡытыуға ҡарашты үҙгәртергә кәрәк. Ҡағиҙә ятлатып ҡына булмай хәҙер. Күберәк телмәр үҫтереү, аралашыуға иғтибар бүленергә тейеш".**

**Мәһәҙей МОРАТОВ.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓29 февралдә Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәте  магазинында (Октябрь проспекты, 2) билдәле ҡумыҙсы Роберт Заһретдинов менән осрашыу үткәрелә. Осрашыуҙа нәшриәттә күптән түгел өс телдә донъя күргән "Башҡорт өҙләүе мәктәбе" методик дәреслегенең презентацияһы уҙғарыласаҡ. Сара 16-00 сәғәттә башлана.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә ОРВИ һәм грипп менән ауырыу буйынса мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, Өфөлә йыл һайын 200-270 мең кеше ошо сирҙәр менән ауырый, уларҙан иҡтисади зыян күреү 370-490 млн һум тәшкил итә. Өфө ҡала округы хакимиәте грипҡа ҡаршы вакциналар һатып алыуға йыл һайын байтаҡ аҡса сарыф итә, прививка сараларына 31-41 процент өфөлө йәлеп ителә.

✓Өфө дәүләт нефть техник университетында "Киләсәк дәүләте: сәйәси-хоҡуҡи аспект" халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияһы үтте. Форумда ҡатнашыусылар дәүләт менән йәмғиәттең үҙ-ара килешеп эш итеү тәжрибәһен, шулай уҡ бөгөнгө заманда дәүләтселек торошон һәм уны үҫтереү мөмкинлектәрен тикшерҙе.  Конференция сиктәрендә политология һәм хоҡуҡ фәне буйынса секциялар, төрлө оҫталыҡ дәрестәре, Кутафин исемендәге Мәскәү дәүләт юридик академияһы менән телекүпер үткәрелде.

✓ "Тәбиғәт" дәүләт унитар предприятиеһы үткәргән "Ҡағыҙға - икенсе ғүмер!" акцияһының сираттағы этабы барышында Өфөнөң Совет районы мәктәп уҡыусылары 14 тоннаға яҡын макулатура йыйҙы. Акцияның сираттағы этабы ҡалала 12 мартта старт аласаҡ. Унда иһә Киров районының мәктәп уҡыусылары ҡатнашасаҡ. Бынан һуң макулатура йыйыу буйынса аҙаҡҡы эстафетаны Өфөнөң Орджоникидзе һәм Калинин райондары ҡабул итәсәк. Акцияның беренсе этабында ҡаланың төрлө райондарынан мәктәп уҡыусылары 56 тоннанан ашыу макулатура йыйҙы. Бер тонна ҡағыҙ дүрт кубометрға яҡын ағасты һаҡлай, ә был биш ҙур ағас тигән һүҙ. Тимәк, бөгөнгө көнгә Өфө уҡыусылары дөйөм алғанда 280-дән ашыу ағасты ҡотҡарған була.

✓Былтыр Өфөлә биш - "Ҡариҙел" биҫтәһендә 80 урынлыҡ, Инорста 155 урынлыҡ, Дим биҫтәһендә 200 урынлыҡ һәм Сипайловола 170 урынлыҡ ике балалар баҡсаһы төҙөлдө һәм сафҡа индерелде. Шулай итеп, үткән йыл эсендә Башҡортостан баш ҡалаһының балалар баҡсаларында урындар һаны 1035-кә артты.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ДИМ МЕНӘН ЗАТОН...
## бер биҫтә буласаҡ

**Былтыр баш ҡалала 702,174 мең кв. метр торлаҡ, йәғни 8740 фатир файҙаланыуға тапшырылған. Шуның 3172-һе - шәхси торлаҡ. Был хаҡта 2011 йылға төҙөлөш комплексының эш һөҙөмтәләрен барлағанда Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Ринат Сәғитов белдерҙе.**

"Киләһе йылдарҙа күп ҡатлы йорттарҙы төҙөүгә күберәк иғтибар бүлергә кәрәк. Улар торлаҡ төҙөлөшөнөң 70 процентын тәшкил итергә тейеш, - тине Ринат Шәйхимансур улы. - Ҡалаға ҡараған ер майҙаны сағыштырмаса ҙур булһа ла, барыһы ла төҙөлөш өсөн ҡаралмаған. Әйтәйек, Ҡаҙан ҡалаһының биләмәһе ике тапҡырға кәмерәк. Әммә унда бейек йорттар төҙөлөү арҡаһында кеше һаны күберәк".

Дим районы төп төҙөлөш урындарының береһе булып ҡаласаҡ, тип билдәләнде. План буйынса киләсәктә Дим Затонға ҡушылырға тейеш.

Социаль торлаҡ төҙөү - айырым мәсьәлә. Быйыл Дим районында 100 мең кв.метр, Шаҡша биҫтәһендә 50 мең кв.метр социаль торлаҡ файҙаланыуға тапшырыу ҡаралған. Р. Сәғитов белдереүенсә, бер кв. метрҙың хаҡы 28 мең тирәһе буласаҡ. Бер бүлмәле фатирҙың майҙаны 34, 36, 40 кв. метр тәшкил итә. Әлегә социаль торлаҡҡа бөтә төҙөлөштөң өс кенә проценты тура килә.

Күп балалы ғаиләләрҙе, етем балаларҙы торлаҡ менән тәьмин итеү проблемаһы киҫкен тора. "Бигерәк тә етемдәргә фатир бүлеү менән бәйле мәсьәләләр ҡырҡыу. Бөгөн 228 бала торлаҡҡа сиратта тора. Уларға фатир тапшырылыуы - бер. Әммә күбеһе унда уңышлы ғына йәшәп китә алмай. Ул йорттарҙа янғындар сыҡҡан осраҡтар бар. Күптәр фатирҙарын ҡуртымға биреп, үҙҙәре урамда йәшәй, - ти Р. Сәғитов. - Бындай ҡыҙғаныс хәлдәр булмаһын өсөн етем балаларға фатирҙарҙы төрлө йорттарҙан бүлеү мәсьәләһен ҡараясаҡбыҙ".

Былтыр иҫке, авария хәлендәге торлаҡтан икеменгә яҡын кеше күсерелеп, уларҙың йәшәү шарттары яҡшыртылған. "Алтмышынсы йылдарҙа төҙөлгән биш ҡатлы йорттар - "хрущевкалар" урынына яҡын арала яңы йорттар ҡалҡып сығыуы ихтимал, -тине Р. Сәғитов, - Ул йорттарҙы яңыртырға, киңәйтергә була һәм был мәсьәлә ҡараласаҡ".

# УРЫНДАҒЫ ЗАКОНДАР...
## эшҡыуарҙы ҡыҙыҡһындырамы?

**Өфөлә эшҡыуарлыҡты үҫтереү өлкәһендәге көнүҙәк проблемаларҙы асыҡлау маҡсатында социологик һорау алыу үткәрелде.**

Һорау алыуҙа ҡатнашыусы өфөләләрҙең 42 проценты һәм эшҡыуарҙарҙың 37 проценты баш ҡалала эшҡыуарлыҡ өсөн һәйбәт шарттар булдырылған, тип билдәләй. Эшҡыуарлыҡ әүҙемлегенә килгәндә иһә, ҡала халҡының өстән бер өлөшө эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләгән белдерә. Әйткәндәй, 2008 йылдан алып, финанс һәм иҡтисади көрсөк арҡаһында, эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнергә теләүсе өфөләләр 52 проценттан 35 процентҡа тиклем кәмегән.

Бөгөнгө көндә бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡтың актуаль проблемалары рәтенә эшҡыуарҙар һалым һалыу системаһындағы етешһеҙлектәрҙе (70 процент), кредиттар буйынса ставкалар юғары булыуын (61 процент), административ кәртәләрҙе һәм контроль органдары эшмәкәрлеген (59 процент), хоҡуҡи базаның етерлек булмауын (53 процент), кредит алыу, лизинг юллау ауырлығын (53 процент) һәм дәүләт органдарындағы коррупцияны (42 процент) индерә. Бизнес ойошма вәкилдәре эшҡыуарлыҡҡа административ кәртәнең төп сығанағы тип һалым органдарын (74 процент) атай.

Үҙ ойошмаһының иҡтисади хәлен баһалап, яуап биреүсе эшҡыуарҙарҙың 36 проценты бизнестан килгән аҡса тик эште алып барыуға ғына етә, тип белдерһә, 17 проценты иһә аҡсаһын бизнесын артабан үҫтереүгә лә еткереүен билдәләй. Респонденттарҙың 29 проценты үҙ эшен бары тик төрлө кредиттар ярҙамында ғына алып барһа, 14 проценты үҙ ойошмаларын зыян күреп эшләүселәр рәтенә индерә.

БР-ҙың "Башҡортостан Республикаһында бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты үҫтереү тураһында"ғы Законы менән тик 43 процент эшҡыуарҙар ғына таныш. Һорау алыуҙа ҡатнашҡан 60 процент эшҡыуар баш ҡалала бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа ярҙам итеүҙе күҙаллаған программаларға ыңғай ҡараша. Шулай уҡ эшҡыуарҙарҙың 79 проценты һәм баш ҡала халҡының 47 проценты Өфө иҡтисадына сит илдән һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән инвестициялар индереүҙе лә ыңғай баһалай. Өфөлә эшҡыуарҙар өсөн уҙғарылған төрлө конкурс һәм форумдар хаҡында 65 процент эшҡыуарҙар хәбәрҙәр һәм уларҙың эшен 63 проценты ыңғай баһалай.

# МУТЛАШЫУСЫЛАР...
## ялған аҡса тарата

**2011 йыл аҙағында Рәсәйҙең Үҙәк банкы тарафынан 1997 йыл өлгөһөндәге модификацияланған 500 һәм 5000 һумлыҡ банкноталар ҡулланылышҡа сығарылды, ә 2012 йылдан улар Башҡортостан Республикаһының түләү әйләнешендә ҡулланыла башланы.**

Банкноталарҙың ҡулланылышҡа индерелеүен мутлашыусылар үҙ файҙаһына борҙо. Улар, йәнәһе лә, илдә барған аҡса реформаһы хаҡында һөйләп, граждандарҙы албырғыта һәм уларға ҡулдарындағы аҡсаны "яңы" банкнотаға алыштырырға тәҡдим итә. Ул банкноталар ғәмәлдә түләү көсөнә эйә булмаған күсермәләр генә.

Ошонан сығып, Башҡортостан Республикаһының Милли банкы төбәк халҡын уяу булырға саҡыра: Рәсәй Банкының 1997 йыл өлгөһөндәге 500 һәм 5000 һумлыҡ банкноталары ҡулакса йөрөшөнән бары тик иҫкергән хәлдә генә ҡулланылыштан сығарыла һәм бының өсөн аҡсаларҙы махсус алмаштырыу талап ителмәй. Шуға күрә, "иҫке аҡсаларҙы алыштырырға" теләүселәр хаҡында хоҡуҡ һаҡлау органдарына хәбәр итергә кәрәк.

ҺОРАУ-ЯУАП

# БҮЛӘКМЕ, МИРАҪМЫ?

**Фатирымды ҡыҙыма бүләк итергә ниәтләйем, тик әлегә ул был хаҡта белмәй торһон ине, тигән теләктәмен. Был мөмкинме?**

- Бүләк итеү килешеүе төҙөүҙең рәсми тәртибе бар: һеҙ ҡыҙығыҙ менән бергә яҙма рәүештә бүләк итеү килешеүе төҙөргә тейеш буласаҡһығыҙ. Килешеү төҙөгәндән һуң уны күсемһеҙ милеккә хоҡуҡ һәм уның менән башҡа төр килешеүҙәр төҙөү буйынса Берҙәм дәүләт реестрында теркәргә кәрәк. Шул саҡта һеҙ ҡулығыҙға теркәлгән килешеү менән хоҡуҡты теркәү хаҡындағы таныҡлыҡ алырһығыҙ. Дәүләт теркәүе өсөн түбәндәге документтар кәрәк буласаҡ:
- фатирға хоҡуҡты раҫлаусы документтар;
- бүләк итеү килешеүе;
- дәүләт пошлинаһын түләү тураһында квитанция;
- БТИ техник паспорты;
- граждандың шәхесен раҫлаусы документ;
- әгәр торлаҡ ир менән ҡатындың уртаҡ милке икән - бүләк итеүгә икенсеһенең ризалығы;
- бүләк итеү ышаныслы кеше аша башҡарылһа - ышаныс ҡағыҙы.

Дәүләт теркәүе өсөн 500 һум күләмендә пошлина түләтелә, бүләк алыусының милеккә хоҡуғын теркәү өсөн дә шунса түләтелә. Бүләк итеү килешеүен юридик консультацияла төҙөргә уйлаһағыҙ, был хеҙмәттең дә түләүле булыуын иҫкә алығыҙ.

Бүләк иткәндән һуң бүләкте ҡабул итеп алыусы ошо фатир өсөн һалым түләргә тейеш була. Ул БТИ баһаһы буйынса торлаҡ хаҡының 13 процентын тәшкил итә. Күреүегеҙсә, бүләкте алыусы ҡатнашлығынан тыш был ғәмәлде башҡарыу мөмкин түгел. Шуға һеҙгә, бәлки, торлаҡты уға мираҫ итеү мәсьәләһен ҡарарға кәрәктер, шул саҡта был хаҡта бирәү ҙә белмәйәсәк.

# ЙӘШЕЛЛЕККӘ ЗЫЯН БУЛҺА

**Машиналарҙы ҡуйыуға урын булмауға һылтанып, уларҙың хужалары йорт алды хужалыҡ майҙанын, газондарҙы баҫып алды, үҙ белдектәре менән бордюрҙы емереп, айырым участкаларҙы хатта йоҙаҡлы сым менән уратып, бикләп үк ҡуя. Бындай башбаштаҡлыҡтарға ҡарата ниндәй саралар ҡулланыу ҡарала?**

- Һорауҙа күрһәтелгән факттарға ҡарата ғәмәлдәге закон нигеҙҙәренә ярашлы административ, граждан-лыҡ һәм енәйәт яуаплылығы ҡарала. Мәҫәлән, йәшеллек зонаһын бағыу, һаҡлау һәм унда эштәр башҡарыу ҡағиҙәләре, Өфө ҡалаһы зонаһында йәшел фондҡа килтерелгән зыянды ҡаплатыу тәртибе тураһында положениеға һәм "Горзеленхоз" тресының урман инспекцияһы тураһындағы положениеһына ярашлы, газондарҙы һәм йәшел үҫентеләрҙе транспорт сараларынан тапатҡан, улар янына машиналар ҡуйған өсөн хеҙмәт хаҡының минималь ике күләме хәтлем штраф түләтеү ҡаралған. Тәртип боҙоуҙар хаҡында протоколдар эске эштәр органдары һәм "Горзеленхоз" тресының вазифалы вәкилдәре тарафынан төҙөлә. Автотранспорт ҡуйыу өсөн территорияға ҡырсын, ком-таш түшәп, тимер сымдар менән уратып алыу һәм ҡыуаҡтарҙы, ағастарҙы ҡырҡыу, газондарҙы тапатыу һөҙөмтәһендә тирә-яҡ мөхиткә зыян килтерелгән осраҡта күп ҡатлы йортта йәшәүселәр граждандыҡ-хоҡуҡи йүнәлештә саралар күреүҙе һорап, тәбиғәтте һаҡлау буйынса прокуратураға мөрәжәғәт итергә хаҡлы.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



## Йөрәктең йыш тибеүе

❖ 0,5 кг лимонды ҡырғыс аша үткәреп, 0,5 кг бал менән болғатырға һәм 20 төйөлгән абрикос емеше ҡушырға. Иртән һәм кис 1-әр ҡалаҡлап ашар алдынан ҡабул итергә.

❖ 2 ҡалаҡ йондоҙ үләнен (белозор болотный) 1 стакан һыуҙа төнәтергә һәм көнөнә ике тапҡыр 1-2 ҡалаҡлап эсергә.

❖ 2 ҡалаҡ энәлек сәскәһен 2 стакан ҡайнар һыуҙа 2 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә, көнөнә 3 тапҡыр стакандың 1/4 өлөшө күләмендә ашар алдынан эсергә. Төнәтмә йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта.

❖ Йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн түбәндәге сараны ҡулланырға була: 1 ҡалаҡ омела үләне япраҡтарын ҡайнатып һыуытылған 1 стакан һыуҙа 10-12 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә, көнөнә 3-4 тапҡыр 50 миллилитрлап ҡабул итергә.

## Йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙары

25 г. ҡәнәфер, ҡырғыстан үткәрелгән 3 эре лимон, 0,5 г. шәкәр, 0,5 л "Экстра" араҡыһы. Быларҙың барыһын да 3 литрлыҡ банкаға һалып, ҡайнар һыу ҡойорға (45-50 градус эҫелектәге) һәм 14 көнгә ҡараңғы урынға ҡуйырға. Дауаланыу курсы өсөн 3 өс литрлы банкалағы төнәтмә кәрәк буласаҡ. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 15 минут алда 25-әр грамлап эсергә. Баш ауыртыуы бөтә, ҡан баҫымы нормаға килә, йөрәк ауырыуҙарының ҡайһы берҙәре юҡҡа сыға.

## Йөрәк-ҡан тамырҙары етешмәүсәнлеге

Балан ҡайырыһы - 1 өлөш, арыҫлан ҡойроғо (пустырник) - 1 өлөш, алтынбаш (золотарник) үләне - 1 өлөш, бесәй үләне (валериана) тамыры - 1 өлөш. Ошо дарыу үләндәрен бергә ҡушып болғатырға һәм 2 балғалаҡ ҡатнашмаға 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 2 минут дауамында ҡайнатырға, һөҙөргә. Көн дауамында ҙур булмаған өлөштәргә бүлеп эсергә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

ҺАБАҠТАР



# ҒҮМЕР БУЙЫ ӨЙРӘНӘБЕҘ

## Замана фетнәләре

**Ихатаһында тауыҡ ҡына тотҡан яңғыҙ йәшәгән бер инәй урамда бойҙай һатып торған кешеләрҙән ике биҙрә бойҙай һатып ала ла, тоҡҡа һалып, өйөнә юллана. Артынан башланғыс синыфта уҡыған ике малай ҡыуып етә. "Оләсәй, ҡана, үҙебеҙ алып барып ҡуяйыҡ", ти улар. "Юҡ-юҡ, ҡайтып етеп барам бит инде, ауыр түгел ул", тип, инәй тоғон бирмәй тартҡылашһа ла, малайҙар тоҡто инәйҙең иңенән көсләшеп һалдырып алып, өйөнә илтәләр. "Һай, афариндар!" тип, малайҙарҙың изгелеге өсөн ҡыуанып, ошо урында нөктә ҡуйғанда ла булыр ине. Тик... Ана шул "тик" ҡәләмгә тотонорға мәжбүр итте лә инде.**

Ҡапҡа төбөнә барып еткәс, инәй, ауыл ғәҙәте буйынса, ярҙамсыл балаларға кәнфит һуҙа. "Юҡ, кәнфит кәрәкмәй, икебеҙгә лә 20-шәр һум аҡса бир", тип тормаһынмы "игелекле" балалар. Инәй аптырауынан ултыра төшә яҙа. Һуң үҙем алып ҡайта алам тигәйнем дәбаһа, тип, илай яҙып, тегеләргә 10-ар һум аҡса бирергә мәжбүр була, ахыры.

Замана фетнәләренә намыҫ, ярҙамсыллыҡ тигән төшөнсәләр бөтөнләй үк ятмы икән ни? "Ҡайҙа барабыҙ беҙ, эй, кешеләр?" тип яр һалырлыҡ бит...

## Дошмандан дуҫ яһа

**Мин бик бәхетлемендер, тимен. Сөнки бөгөн минең, был кеше - минең дошманым, тип бармаҡ менән төртөп күрһәтерлек күрә алмаған кешем юҡ. Бер ауыҙ йылы һүҙ менән төптө ят кешене дуҫ итергә лә, бер яңылыш ысҡынған һүҙ менән дошман итергә лә мөмкин.**

...Ҡыҙым мәктәптән кәйефһеҙ генә ҡайтып инде. Бер аҙ йөрөгәс, быны серe лә асылды. Фәлән ҡыҙ мине дошман күрә, яратмай, ти был. "Бәлки, һиңә шулай тойола ғыналыр, улай күрә алмаҫҡа нигеҙ бармы һуң?" тип һорайым. Теге яурынын ғына һикертә. Күрәһең, үҙ-ара нимәлер булған, ләкин һөйләгеһе килмәй. "Ҡыҙым, һин иртәгә уға берәй йылы һүҙ әйт йәки йомшаҡ ҡына итеп һөйләшеп, кәрәкмәһә лә, берәй китапмы, ручкамы һорап торған бул. Бирһә, кире тапшырғанда матур итеп рәхмәт әйт. Кешегә үҙенән артығыраҡ һәйбәт булғанда ғына дуҫлыҡ барлыҡҡа килә", тинем. Ҡыҙым шулай иткән дә. Аҙаҡ теге ҡыҙ менән бик яҡын әхирәттәр булып киттеләр.

Ситкә уҡырға китер алдынан да аманат һандығына түбәндәге кәңәште өҫтәнем: "Ҡырҡ ерҙән килгән ҡырҡ ата балаһы араһына бараһың, һүҙ күтәрергә өйрән. Оҡшамаған һүҙ ишетһәң, ишетмәгәнгә һалыш. Асыу - алдан, аҡыл - арттан. Асыуың баҫылғас, төптө икенсе һүҙ ҡуш та ҡуй теге хәбәр эйәһенә".

Дуҫтан дошман яһау өсөн аҡыл кәрәкмәй, дошмандан дуҫ яһау өсөн алтын аҡыл кәрәк! Йәшәй-йәшәй шул хәҡиҡәткә төшөндөм: кешенең иң ҙур дошманы - үҙе. Сөнки ниндәй көслө дошманды ла еңеп була: ҡорал менәнме, аҫтыртын мәкер менәнме, кеше яллапмы... Ә бына үҙеңде ошоларҙың береһен ҡулланып та еңеп булмай, бары тик үҙең менән шәхсән үҙеңә көрәшергә генә ҡала. Үҙеңде, үҙеңдәге үҙеңә оҡшап етмәгән ҡылыҡтарҙы еңә алһаң - һин Кеше! Тимәк, һиндә ихтыяр көсө, рух тигән нәмә бар.

Йәш саҡта сапсанырак, түҙемһеҙерәк булаһың, барыһы ла бер юлы ғына кәрәк һымаҡ. Йәш арткан һайын аҙымдар ҙа, уйҙар ҙа һалмағыраҡ була башлай. Уйҙар төпкәрәк төшә, төптәнерәк уйлата... Кешенең күңелен аяу тигән нәмә хаҡында ла йышыраҡ уйлана башлайһың. Тел бик ҡысытһа ла, ҡайһы бер әсе һүҙҙәрҙе эсеңә, хатта йәшең менән ҡуша йотоп ҡалырға ла тура килә...

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

УЙЛЫҒА - УЙ...

# Ә НИҢӘ АЙГӨЛ ТҮГЕЛ?



Бер ғилми хеҙмәткәребеҙҙе, "ботаник" тип йөрөтәбеҙ үҙен, алып, машина менән юлға сыҡтыҡ. "Ботаник"тың кәйефе күтәренке, ниндәйҙер ҡыуанысы барлығы һиҙелеп тора. Машина ҡуҙғалып китеү менән ул ана шул шатлығы менән бүлешә һалды:

- Мин өр-яңы мәмерйә таптым!

"Бик һәйбәт булған", тип уйлап ҡуйҙым эстән генә. Сөнки беҙҙең Бөрйән биләмәһендә асылмаған мәмерйә ҡалмағанын беләм, тик уларҙың барыһына ла кеше аяғы баҫа алмай. Юлдан күҙен алмай килгән шофер ҙа, уның шатлығын уртаҡлашҡандай, баш сайҡап ҡуйған булды. Әммә ғилми хеҙмәткәребеҙ уның хәбәрен былай ҡабул итеүебеҙҙе мөрхәтһенмәне булһа кәрәк.

- Мин уға бик елле исем дә әҙерләп ҡуйҙым әле! - тип өҫтәп ҡуйҙы.

Әҙәп һаҡлап, "Бик шәп булған", тигән булдым. Шоферыбыҙ "Ниндәйерәк исем ҡуштың инде?" тип мөңгөрләгәндәй итте. Һәр кемдең үҙ уйына сумып барыу ғәләмәтеме, әллә башҡа сәбәптәнме, беребеҙ ҙә теге "ботаник"тың һүҙ ҡуйыртыуын теләмәй инек шикелле.

- Мин был мәмерйәне Вероника тип атарға булдым!

Беҙҙән хуплау көткән иптәш бер аҙға тынып ҡалды. Шунан шофер тыныс, шулай ҙа бер аҙ ҡырыҫ тауыш менән һорай ҡуйҙы.

- Ә нишләп Айгөл түгел?

Былдай һорау "ботаник"ты ғына түгел, мине лә аптырауға һалды. Бер аҙ уйланып бара биргәс, ғилми хеҙмәткәрҙең яуабы ишетелде. Шулай ҙа уның тауыш көрлөгө бер аҙ кәмей төшкәйне.

- Сөнки был мәмерйәне мин таптым!

Шофер быңдай ғына яуапҡа риза булманы. Шулай ҙа һөйләшеү әлегә һәүетемсә генә дауам итә.

- Тимәк, һиңә тиклем был мәмерйәне урындағы халыҡ белмәгән булып сыға инде?

- Нишләп белмәһен, белгәндер инде...

- Исемен һораштыңмы һуң?

- Ә ниңә мин уның исемен һорашырға тейеш? Мин уны таптым, мин уға исем ҡуштым - уның законы шулай...

- Законы булғас, һәйбәт инде ул. Хәҙер урындағы халыҡ ошо мәмерйәне Вероника тип атарға тейеш була инде һинеңсә?

- Шулай тейештер инде...

- Ә үҙең нисек уйлайһың. Бөгөндән башлап 70 йәшлек әбей "Тыуса танам ҡайтмай йөрөй ине, балалар Вероника мәмерйәһе эргәһенән саҡ табып алып ҡайтты", тип һөйләйәсәкме? Әллә һаман боронғоса "Күлйорт тирәһендә йөрөгән малҡай, насип иткәс, ҡошҡортҡа һуғылмай, имен-аман йөрөгән, ярай әле балалар табып алып ҡайтты", тип әйтер микән?

- Белмәйем...

- Ярай, борғоланма инде, һин дә беләһең, мин дә беләм. Ул мәмерйәне халыҡ борон-борондан Күлйорт тип атаған, әле лә шулай тип атай, киләсәктә лә шулай тип атаясаҡ. Икенсе исем барыбер йәбешмәйәсәк уға. Ә шулай ҙа мине Вероника исеме борсой әле. Нишләп улай атарға булдың һин уны?

- Ә ниндәй матур яңғырай: Вероника!

- Ә Айгөл исеме матур яңғырамай инде һинеңсә.

- Мин аңламайым, нишләп исемгә бәйләнеп ултыраһың әле? Улай булғас, һин үҙең әйт әле, ниңә һиңә Вероника исеме оҡшамай?

- Бына әле машинала өсәү китеп барабыҙ, - тип теҙеп китте шофер. - Һин урыҫ, мин урыҫ, ә ул башҡорт (миңә күҙ атып алды). Башҡортостандың тик башҡорт халҡы ғына йәшәгән төйәгендә көн күрәбеҙ. Бына ошо башҡорт (миңә ымлап күрһәтте) һинең өйөңә килеп, һинең малайыңа төртөп күрһәтеп, "Балаңа исемде Абдрахман тип ҡушаһың, был исем яңғырауыҡлы", тип әйтә ҡалһа, һин нимә тип яуап бирер инең уға?..

Ғилми хеҙмәткәребеҙ яуапһыҙ ҡалып, селт-селт күҙҙәрен генә йомдо.

- Был ниндәй мәғәнәһеҙлек, тип уйлап бараһыңдыр инде, - тип һүҙен дауам итте шофер.- Шулай шул, һинең мәмерйәгә ҡушҡан исемеңде лә урындағы халыҡ тап һин әле уйлап ултырған һымаҡ ҡабул итәсәк. Бер-береңде хөрмәт итмәүҙән килеп сыға быңдай хәлдәр...

...Әле уйға ҡалып барам. Әллә юғары белемле "ботаник" һай йөҙә, әллә урта белемле шоферҙың мәҙәниәте юғары...

**Әғләм ШӘРИПОВ.**
**Бөрйән районы.**

АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ

# БАЛА ТӘРБИӘЛӘҮҘЕҢ...

## алтын ҡағиҙәләре



**"Балам өсөн бер нәмә лә йәл түгел, барыһын да уның өсөн эшләйем", тип йәшәүсе ата-әсәләр позицияһы дөрөҫмө? Ғаиләлә баланы үҙәккә ҡуйыу, уны өйҙөң бәләкәй бойороусыһына әйләндереүҙең эҙемтәләре ниндәй булыр? Һорауҙар күп. "Нисек грамоталы ата-әсә булырға" тигән мәҡәләһендә Навзат Тархан түбәндәге төп кәңәштәргә туҡталып китә:**

**Тәү сиратта баланы танып белегеҙ.** Баланың һәр йәшенә хас психосоциаль үҙенсәлектәр бар. Ошо үҙенсәлекле осорҙарҙы белеү кәрәк, шул саҡта һеҙ баланың рухи һәм физик талаптарына яраҡлы эш итергә өйрәнәсәкһегеҙ. Йәғни һеҙ балаға кәрәкмәгән әйберҙәр менән уның башын ҡаңғыртмаясаҡһығыҙ, кәрәкмәгән һорауҙар бирмәйәсәкһегеҙ.

**Балаға шәхес булырға мөмкинлек бирегеҙ.** Бала - беҙҙең сабыйыбыҙ, әммә ул беҙ түгел. Ул икенсе, айырым кеше, шунлыҡтан ата-әсә уның айырым шәхес булыуын танырға тейеш.

**Һығылмалы булығыҙ.** Сабыйҙарҙың ғәҙәттәре төрлө. Күп кенә осраҡта: "Мин атайым эшләгәнде үк эшләйем, бер ҡасан да быны насарлығын тойғаным юҡ", - тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килә. Әммә ғаиләлә биш бала булған осраҡта ла, уларҙың һәр береһенең үҙ үҙенсәлектәре бар.

**Иғтибарлап тыңлай белегеҙ.** Баланың һүҙен аҙағына тиклем тыңлап бөтөргә, һөйләшкән ваҡытта күҙҙәренә ҡарап торорға, ризалыҡ белдереп, башығыҙҙы һелкеп хупларға, һүҙ араһында һорауҙар бирергә лә кәрәк.

**Диалог алып барығыҙ.** Үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе яйлау өсөн шәхесте баҫыу йә абруйыңды эшкә ҡушыуға ҡарағанда диалогтың әһәмиәте ҙурыраҡ булыуын аңларға кәрәк.

**Ғаилә эсендә йыйылыштар ойоштороғоҙ.** Бергәләшеп ваҡыт уҙғарыу бик кәрәк. Ул ғаилә ағзаларын яҡынайта, сөнки улар бер-береһенең шатлыҡ-ҡайғылары тураһында ишетә. Был ғаилә йыйылыштарының нисә тапҡыр үткәрелеүе мөһим түгел, уларҙың ғаилә ағзаларына файҙалы булыуы кәрәк.

**Балағыҙҙың дуҫтары ниндәй булыуын белегеҙ.** Өс йәше тулғандан һуң сабый тормошонда дуҫлыҡ иң мөһим ролдәрҙең береһен уйнай башлай. Ул донъяны дуҫтары менән бергә уйнау аша танып белә.

*АРҘАҠЛЫ БАШҠОРТТАР*

# ҠАРАМЫШЕВТАР НӘҪЕЛЕ

**Ҡарамышевтарҙың нәҫел ебе XVI быуатта йәшәгән Юрматы ырыуының түбә башлығы Ҡармыш-бабаға барып тоташа. Уның 1553-1554 йылдарҙа юрматылар башлығы Тәтегәс бей менән бергә Ҡаҙанға барып, Иван батша наместнигынан үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғы алып ҡайтҡанлығы билдәле.**



Әмир Ҡарамышев.

Артабанғы быуаттарҙа Ҡармыштың нәҫелдәре хәрби хеҙмәттә дан-шөһрәт ҡаҙана. Йософ Ҡарамышев Ырымбур кадет корпусын тамамлап, оҙаҡ йылдар Башҡорт ғәскәрендә хеҙмәт итә. Халыҡ уны Йософ-майор тип йөрөтә, ә ҡайһы бер тарихсылар уның һуңғы хәрби дәрәжәһе генерал-майор булған тип раҫлай. Һуңынан Маҡар олоҫо старшинаһы булып тора. Йософтоң ике улы ҡала. Солтангәрәй сәйәси эшмәкәр һәм эшҡыуар булып китә. Ә кесеһе Батыргәрәй Ҡаҙандағы уҡытыусылар семинарияһын тамамлап, мөғәллимлек юлын һайлай һәм үҙенең бөтөн ғүмерен балалар уҡытыуға, тәрбиәләүгә арнай.

Батыргәрәй Ҡарамышевтың ғаиләһендә Мөхәмәтгәрәй, Әмир, Мөхтәр, Сөләймән исемле улдар тыуа. Гәрәй Ҡарамышев бала сағында ауырыу сәбәпле, 11 йәшендә генә уҡырға бара. Шуға ҡарамаҫтан, белемгә һәләтле була. Ауыл мәҙрәсәһен тамамлағандан һуң, Ҡаҙан ҡалаһына барып, Уҡытыусылар семинарияһына уҡырға инә. Был осорҙа семинария уҡыусылары араһында революцион рух хөкөм һөрә. Г. Ҡарамышев та унан ситтә ҡалмай, әүҙем ҡатнаша. Йәшерен түңәрәктәрҙә лектор булараҡ сығыш яһай, революцион ойошмаларҙың гәзиттәрен яҙҙырып уҡый. Һөҙөмтәлә ул башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәте һәм дәүләт эшмәкәре булараҡ танылыу яулай.

Әмир Ҡарамышев - Башҡорт милли-азатлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашҡан офицер. Ул ҡартатаһы кеүек үк хәрби хеҙмәт юлынан китә. Революцияға тиклем батша армияһында хеҙмәт итә. Әрмелә хәрби мәктәпте тамамлап, корнет чинын ала. Уның ҡустылары ла офицерҙар була, милли хәрәкәттә ҡатнаша. Әмир Ҡарамышевтың вафатынан һуң, уның урынына 1-се Башҡорт кавалерия полкы командиры итеп ҡустыһы прапорщик Мөхтәр Ҡарамышев тәғәйенләнә. Шулай уҡ Мөхтәр 1914 йылда Маҡарҙа беренсе китапхана аса, ағас эшкәртеү училищеһын астыра. Ике һуғышта ҡатнаша. Сөләймән дә башҡорт ғәскәрҙәре сафында һуғыша һәм 19 йәшкә лә етмәйенсә, 1919 йылда тыуған яҡтарынан алыҫта һуғыш ҡырында ятып ҡала. Батыргәрәйҙең иң кесе балаһы - ҡыҙы Рузиҙә хәрби табип сифатында Бөйөк Ватан һуғышының фронт юлдары аша үтә. Ҡарамышевтарҙан Әмирҙең генә Байслан исемле улы ҡала һәм ул да Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашып, капитан дәрәжәһендә ҡайта. Уның улы һәм ейәне лә ата-олаталары юлын дауам итеп, үҙҙәрен хәрби хеҙмәткә арнай. Бөгөн Ҡарамышевтарҙың нәҫелендә уларҙы берләштереп тороусы ниндәй уртаҡ сифат бар, тигән һорауға, моғайын, хәрби, ғәскәри булмыштарына тоғролоҡ, тип яуапларға булалыр.

Әлбиттә, бер туған Ҡарамышевтар тураһында оҙон-оҙаҡ итеп һөйләргә мөмкин. Әммә бөгөн күтәрелгән төп мәсьәлә - уларҙың исемен мәңгеләштереү проблемаһына ҡайтып ҡала. Күптән түгел ошо мәсьәлә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының тарих фәндәре докторы, профессор Марат Ҡолшәрипов рәйеслегендәге комиссияла ла күтәрелде. Фекер алышыуҙарҙа Ҡарамышевтарҙың һәр ҡайһыһының айырым һәм бергә лә исемдәрен мәңгеләштереү зарурлығы билдәләнде. Халҡыбыҙ дәүләтселегебеҙгә, Башҡорт милли ғәскәренә нигеҙ һалыусы арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең исемен онотторға тейеш түгел. Был мәсьәләне хатта БР Хөкүмәте кимәлендә күтәреп сығыу кәрәк. Ошо йүнәлештә тәүге аҙым яһалды ла инде: комиссия ултырышында ҡатнашыусылар ҡарар ҡабул итеп, уның нигеҙендә Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенә тәҡдим менән сығырға ҡарар итте. Ҡарарға бер туған Ҡарамышевтарға ҡуйыласаҡ обелисктың проектын әҙерләү; Маҡар ауылының Үҙәк урамын Ҡарамышевтар урамы тип үҙгәртеү, Арыҫлангәрәй мулланың элекке өйөндә бер туған Ҡарамышевтарҙың музейын асыу; Ишембай ҡалаһындағы кадет мәктәбенә - Әмир Ҡарамышев, Маҡар мәктәбенә Мөхәмәтгәрәй Ҡарамышев исемдәрен биреү; Ишембай, Стәрлетамаҡ ҡалаларында бер туған Ҡарамышевтар исемендәге урам булдырыу; 2012 йылдың октябрь-ноябрендә бер туған Ҡарамышевтарҙың ижтимағи-сәйәси эшмәкәрлегенә арналған ғилми-ғәмәли конференция үткәреү һәм башҡа мәҙәни саралар ойоштороу тураһындағы пункттар инде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Булыр илдең балаһы бер-береһенә батыр, тиер..." ти халыҡ мәҡәле. Ләкин матди тормош алғы планға сыҡҡан һайын рухи ҡиммәттәр, тарих һабаҡтары, дәүләтселегебеҙгә нигеҙ һалыусылар, ғөмүмән, ниндәй генә эштә булмаһын, уның башында тороусылар онотола бара. Хәтеребеҙ ныҡ ҡыҫҡара, күрәһең. Ә бит мәңгеләштерәһе, халыҡҡа ҡайтараһы хәтер һандығы бик бай беҙҙең. Дәүләтселегебеҙ, милләтебеҙ артабан да йәшәһен тиһәк, бәлки, ысынлап та, батырҙарыбыҙҙы, арҙаҡлы шәхестәребеҙҙе хөрмәтләп, уларҙың исемдәрен мәңгеләштереп булһа ла батырлыҡ эшләргә кәрәктер...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

Баланың дуҫтарын тәнҡитләргә ярамай, ә өйөгөҙгә саҡырып, улар менән яҡынданыраҡ танышырға кәрәк. Дуҫтарын кәмһетеп ҡарау баланы һеҙҙән ситләштереп ҡуйыуы бар, ул осраҡта сабыйығыҙ барлыҡ эштәрен дә һеҙҙән йәшерә башлауы мөмкин.

**Ғаилә йылыһын бүлегеҙ.** Бала өсөн көтөлмәгән ваҡытта йылмайыу уның күңелендә ышаныс һәм эҫенеү тойғоһо уятасаҡ. Шулай уҡ сабыйығыҙ ныҡ ҡурҡҡан йә булмаһа, тулҡынланған ваҡытта уның ҡулдарын усығыҙға алығыҙ. Физик ҡағылыуҙар бала күңелендә ышаныс тойғоһон уята, онотолмаҫлыҡ эҙ ҡалдыра. Мөхәббәт хөкөм иткән өйҙә ата-әсәнең абруйы арта, уларға ҡарата хөрмәт үҫә генә бара. Сабый ата-әсәһенең һөйөүен юғалтмаҫ өсөн генә лә яҡшы эштәр башҡарасаҡ. Мөнәсәбәттәре һөйөү менән һуғарылған ғаиләлә үҫкән бала тормошта күберәк уңыш ҡаҙана.

**Балаға көсө еткәндәй генә эштәр йөкмәтегеҙ.** Уңыш тәмен тойоп, үҙаллылыҡты белеп, кәрәк тиклем һеҙҙән бойондороҡһоҙ булырға өйрәнһен өсөн балағыҙға уның хәленән килерҙәй өй эштәре ҡушығыҙ, ара-тирә магазинға ебәрегеҙ. "Уның эштәренән миңә ниндәй ярҙам булһын инде", тимәгеҙ.

**Иғтибарығыҙҙы проблемаларҙы хәл итеүгә йүнәлтегеҙ.** Ниндәйҙер проблема килеп тыуа ҡалһа, юғалып ҡалыу һәм тулҡынланыу, беренсе ҡыйынлыҡ ваҡытында ҡойолоп төшөү урынына уны тыныс ҡына сисергә тырышырға кәрәк булыуын балаға яҡшылап аңлатырға кәрәк. Оло кешенең тормош һабаҡтары - бала өсөн хазина. Әммә бойороу тактикаһы урынына кәңәшсе позицияһында туҡталығыҙ.

**Һеҙ бала өсөн өлгө булыуығыҙ тураһында онотмағыҙ.** Бала һеҙгә ҡарап, баһа биреп: "Минең дә ата-әсәйем кеүек булғым килә", - тиеү ихтималы нисек? Уның өсөн өлгө булараҡ үҙегеҙҙе ни тиклем дөрөҫ тотаһығыҙ? Бала һеҙҙән өйрәнгәндә һөйләгән һүҙҙәрегеҙгә түгел, ә ҡылыҡтарығыҙға нығыраҡ иғтибар итеүен онотмағыҙ.

**Хәл-ваҡиғалар тураһында һөйләшегеҙ.** Ҡайғылы йә шатлыҡлы хәл-ваҡиғалар тураһында әңгәмәләшеү балала ғаиләгә эҫенеү тойғоһон уята. Ошо рәүешле ул ғаиләләге тәртиптәрҙе, әхлаҡи ҡиммәттәрҙе үҙләштерә. Уға аҡыл өйрәтеү файҙа килтермәйәсәк. Бала менән аралашҡанда үҙегеҙ генә һөйләмәгеҙ, диалог кәрәк.

**Баланың ым-хәрәкәттәренә иғтибар итегеҙ.** Балалар үҙ проблемаларын һүҙҙәр ярҙамында аңлата алмай. Ҡыҙыулыҡ, артыҡ теремеклек, ыҙғыш-талаш ойоштороу, алдыҡ, ашарға теләмәү, йоҡоһоҙлоҡ, ҡурҡаҡлыҡ, көнләшеү, мәктәптәге уңышһыҙлыҡтар, тотлоғоу, ҡаршы затҡа ҡарата хас булмаған ҡыҙыҡһыныу - былар барыһы ла проблемалар барлығы хаҡында һөйләй. Баланың был йәшерен депрессия сәбәптәрен һөйләп бирә белмәүен өлкәндәр дөрөҫ аңларға тейеш, бәлки, дауа кәрәк булыр.

**Дәртләндереүҙә лә, шелтәләүҙә лә алтын урталыҡты һайлағыҙ.** Өй - ҡағиҙәләр территорияһы булырға тейеш. Мәҫәлән, хатта футбол уйнағанда ла ҡағиҙәләрҙе үтәмәгән уйынсыға штраф һалына. Әгәр ҙә бала тыңлаусан, эшсән, аҡыллы икән, уның тырышлыҡтары һәм эштәре дәртләндереүгә лайыҡ. Тик был осраҡта баланың шәхесен түгел, ә эштәрен маҡтарға кәрәк. Ҡылған эштәре өсөн үҙ өҫтөнә яуаплылыҡ алырға һәм йәмғиәт ҡағиҙәләрен үтәргә өйрәнеүе баланың алдына ҡуйылған талаптарҙы һәм сиктәрҙе аңлауы менән туранан-тура бәйле. Бала ҡылған ҡылыҡтарына ярашлы яуап бирергә һәм шелтә алырға тейеш.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



## АҪАБАЛЫҠ МӨНӘСӘБӘТТӘРЕНЕҢ ҮҘГӘРЕҮЕ

**XIX быуат урталарында Рәсәйҙә ҙур социаль-сәйәси ваҡиға була: хөкүмәт крепостнойлыҡты бөтөрә - Бөйөк реформалар ваҡыты башлана. Билдәле булыуынса, был осорға башҡорт ерҙәренең күп өлөшө дәүләт, алпауыттар һәм завод хужалары тарафынан тартып алынған була инде. Реформалар башланғас та, хөкүмәт башҡорттарҙы ерһеҙ ҡалдырыуын дауам итә. Крайҙа бындай сәйәсәтте ҙур тырышлыҡ менән тормошҡа ашырған Ырымбур генерал-губернаторы Кржановский, башҡорттар тиҙерәк ултыраҡ тормошҡа күсһен өсөн уларҙы тиҙерәк ерһеҙ ҡалдырыу мотлаҡ, тип раҫлай.**

XIX быуаттың 60-сы йылдары башында хөкүмәт кантонлыҡ системаһын бөтөрә. Уның нигеҙендә башҡорттар, мишәрҙәр, типтәрҙәр, ерһеҙ ярлы крәҫтиәндәр граждандар ҡатламына күсерелә, йәғни ирекле ауыл кешеһенә әүерелә. Башҡорттарҙың аҫаба ерҙәренә хоҡуғы һаҡлана, ләкин уларҙың күләме ирҙәрҙең йән башына 40 дисәтинәнән артмай. Башҡорт ғәскәре составында булған ерһеҙҙәргә (припущенниктарға) норма - 30, граждан припущенниктарына 15 дисәтинә була. Йән башына бүленмәй ҡалған майҙандар аҫабаларҙың дөйөм милке булып ҡала. Уларҙы башҡорттарҙың ризалығы менән һатырға йәки ҡуртымға бирергә мөмкин була. Төбәктең бер ни тиклем өлөшө крәҫтиән ҡатламына индерелһә лә, башҡорттар өсөн уларҙың ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғы һаҡланып ҡала. Әммә был ҡанун аҫаба башҡорттар һәм припущенниктар араһындағы ҡатмарлы хоҡуҡи мәсьәләләрҙе хәл итмәй. Ошо йәһәттән һәм башҡорт ерҙәрен бүлеү, межалау маҡсатынан 1869 йылда яңы ҡағиҙәләр индерелә, элек ҡабул ителгәндәре системалаштырыла, ҡайһы бер урындары аныҡлана һәм үҙгәртелә.

Ерҙәрҙе бүлеү тулыһынса тамамланғас, хөкүмәт уларҙы һатыу һәм ҡуртымға биреү буйынса ла яңы ҡағиҙәләр индерә. Бер яҡтан, был аҫаба башҡорттарға үҙ ерҙәрен һатыу йәки ҡуртымға биреү шарттарын үҙҙәренә хәл итеү мөмкинлеген биреп, уларҙың хужалыҡ үҙаллылығын киңәйтеүсе ыңғай яңылыҡ булһа, икенсе яҡтан, башҡорт ерҙәрен талауға сикһеҙ юл аса. Крайға алпауыттар, сауҙагәрҙәр, чиновниктар һәм башҡа урындағы һәм ситтән килгән эшлекле бәндәләр ағыла башлай. Улар ерҙәргә хужа булыу маҡсатынан бөтөн оҫталығын-алдаҡ, көс ҡулланыу, хәйләләшеү - барыһын да эшкә егә. Һөҙөмтәлә XIX быуаттың 60-70-се йылдары башҡорт ерҙәрен масштаблы талау йылдары булып тора. Был хаҡта Н.В.Ремезов: "1869-1879 йылдар эсендә ике миллион дисәтинә самаһы башҡорт ерҙәре таланыуын танырға кәрәк, - тип яҙа. - Был мисәт ярҙамында талау тип билдәләнгән күренеш ике төргә бүленә: ҡаҙна тарафынан запас ерҙәрҙе таратыу һәм башҡорттарҙан туранан-тура ер һатып алыу".

Бындай талау сәйәсәте башҡорттарҙа ҙур ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙыра. Ошо шарттарҙа хөкүмәт башҡорттарҙың ер биләүселеге һәм уны һатыу мәсьәләһенә ҡабат урап ҡайтырға мәжбүр була, ҡағиҙәләрҙе ҡайтанан ҡарай, ҡайһы бер чиновниктарҙы эштән бушата, чиновниктарға ер биреүҙе туҡтата. Әммә дөйөм милектә тип һаналған башҡорт ерҙәре ни аҫаба башҡорттарға, ни припущенниктарға ҡайтарып бирелмәй.

✓ *Бөгөн илебеҙҙә йәшәгән милләттәрҙең тормош-көнкүрешен сағылдырған бер генә үҙәк федераль телеканалы ла юҡ. Милләттәр эштәре буйынса министрлыҡ ойоштороу мәсьәләһе лә өлгөрөп етте.*



**Былтырғы йыл аҙағында Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты республикабыҙҙың власть органдары, ғилми йәмәғәтселеге, ижтимағи ойошмалары, матбуғат саралары вәкилдәре ҡатнашлығында "Башҡортостан Республикаһында гражданлыҡ йәмғиәтен барлыҡҡа килтереү һәм милли мәсьәләләрҙе хәл итеү" тигән темаға түңәрәк ҡор үткәргәйне. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: илебеҙҙә гражданлыҡ йәмғиәте төҙөү мәсьәләһе фәҡәт бөтә донъя иҡтисад көрсөгөнә тарып, милләттәр һәм дәүләттәр араһындағы көсөргәнеш арта барған саҡта күтәрелә. Дөрөҫөн әйткәндә, гражданлыҡ йәмғиәте моделе кешелекте үҙ милли асылынан, йола-традицияларынан баш тартып, совет осорондағы кеүек "совет халҡы" ҡорона йыйылырға саҡырыу булараҡ та яңғырай һымаҡ. Ҡыҫҡаһы, ошо һәм башҡа мәсьәләләр хаҡында философия фәндәре докторы, Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһы академигы, Рәсәй Гуманитар фәндәр академияһы академигы, Өфө дәүләт авиация техник университетының кафедра мөдире Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН менән философия фәндәре докторы, Өфө дәүләт авиация техник университеты профессоры Айрат ЗАРИПОВ фекер алыша.**

▸ **Һуңғы ваҡытта Рәсәйҙә гражданлыҡ йәмғиәте хаҡында күп һөйләйҙәр. Бөтә осраҡта ла быңдай йәмғиәтте төҙөү зарурлығы хаҡында һүҙ алып барыла. Бер үк ваҡытта милләт, халыҡ, үҙбилдәләнешкә хоҡуҡ төшөнсәләре лөғәттән төшөп ҡала бара. Һәр хәлдә, ил етәкселәре был һүҙҙәрҙе урап үтергә тырыша. Ошондай шарттарҙа уларҙы гражданлыҡ йәмғиәте мәсьәләһе борсоуы башҡаларын инҡар итеүгә йүнәлтелгән һымаҡ. Гражданлыҡ йәмғиәте төҙөү нигеҙендә милләттәрҙе инҡар итеү сәйәсәте ятмаймы икән?**

ратив органдар милли ойошмаларҙың эшенә ҡыҫылһа, бынан иң беренсе нәүбәттә гражданлыҡ йәмғиәте зыян күрә. Сөнки кеше үҙен милли хоҡуҡтарын сикләгән дәүләттең гражданы итеп тоймай.

**А. ЗАРИПОВ:** Минеңсә, гражданлыҡ йәмғиәте демократия ҡанундары буйынса хоҡуҡи дәүләткә генә таяна ала. Шул уҡ ваҡытта хәҙерге ваҡытта берәй илдә милләт, этнос, милли үҙаң мәсьәләләрен алға һөргән ысын гражданлыҡ йәмғиәте бармы икән? Ысынында, ундай илдәр юҡ. Миҫалға Американы, Германияны, Францияны алып ҡарайыҡ. Уларҙа тулы гражданлыҡ

дағы 10-20 йыл эсендә ундай дәүләттәр булмаясаҡ.

▸ **Милләттәрҙе, уларҙың йәшәйешен инҡар иткәс, бәлки, гражданлыҡ йәмғиәте бөтөнләй беҙгә кәрәкмәйҙер һәм иң алдынғы демократик тип һаналған илдәрҙә лә уның элементтары ғына булғас, гражданлыҡ йәмғиәте, бәлки, утопия ғыналыр. Шулай түгелме?**

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Беҙ гражданлыҡ йәмғиәтен, асылда, капиталистик йәмғиәт менән бәйләп аңлайбыҙ. Минеңсә, дәүләт үҫеше нигеҙен шәхси милекселек үҫеше тәьмин иткән саҡта ғына

орт йәмғиәте гражданлыҡ йәмғиәте булған, тип иҫәпләмәйем, шулай ҙа ул ваҡытта уҡ башҡорт йәмғиәтендә гражданлыҡ йәмғиәтенең традициялары урын алған, тип әйтергә нигеҙ бар. Башҡорттарҙа ғына түгел, рустарҙа ла гражданлыҡ йәмғиәтенең ниндәйҙер принциптары булған. Тарихта "Болалы ваҡыт" тип нарыҡланған XVII быуат башында, Рус батшалығы һәм башҡалар тейешенсә халыҡты туплап дошманға ҡаршы сыға алмаған заманда, Минин менән Пожарский бар инициативаны үҙ ҡулына алып, халыҡты туплап, баҫҡынсы поляктарҙы һәм шведтарҙы батшалыҡтан ҡыуып сығарыуҙы ойоштора. Был саҡта Мәскәүҙе һәм уның дәүләтселеген һаҡлап алып ҡалыуҙа башҡорттар ҙа хәл иткес роль уйнай. Был хаҡта Башҡортостанға бер килгәнендә Владимир Путин да телгә алып үтеп, башҡорттарҙың Рус дәүләтселеген һаҡлап ҡалыуҙағы ролен билдәләне. Тимәк, ошо осорҙа уҡ Рәсәйҙә гражданлыҡ йәмғиәтенең нигеҙҙәре һалына башлай. Шуға күрә беҙ бөгөн гражданлыҡ йәмғиәте тураһында һүҙ алып барғанда үҙебеҙҙең милли традицияларыбыҙҙы ла онотмаҫҡа тейешбеҙ.

иҫәбеҙгә төшөрәйек. Шуның өсөн дә Европа илдәрендә гражданлыҡ йәмғиәте элементтарын булдырыу еңелерәк. Ә беҙҙә иһә, тарихыбыҙҙың ниндәй осорон алып ҡараһаҡ та, һәр осорҙа заманына күрә авторитар режим хөкөм һөрә һәм ул гражданлыҡ йәмғиәте нигеҙҙәрен юҡҡа сығара килә, сөнки был режимдың ил менән үҙе идара иткеһе килә. Бөгөн илебеҙ етәкселәре: "Гражданлыҡ йәмғиәте элементтарын беҙ үҫтерергә тейешбеҙ", - тип әйтә. Хөкүмәт, дәүләт быңдай йәмғиәтте бер нисек тә үҫтерә алмай. Әгәр ҙә улар был процеҫҡа тығылһа, был йәмғиәт юҡҡа сыға, йә булмаһа, улар тарафынан тәғәйенләп ҡуйылған кешеләр етәкселегендә формаль төҫ ала. Европа илдәрендә шәхси милекселек, эгоизм, индивидуализм көслөрәк, Көнсығыш илдәренә иһә коллективлыҡ хас. Шуға күрә Шәреҡ илдәрендә гражданлыҡ йәмғиәте элементтары бик һирәк күҙәтелә.

Һуңғы ваҡытта халыҡ Мәскәүҙең Болотный майҙанына йыйылып, үткән һайлауҙарға ҡарата үҙ фекерен белдерҙе. Был майҙандағы сараны Рәсәйҙең күп төбәктәрендә күтәреп алдылар. Минеңсә, "аҫтан" ойошторолған ошондай саралар гражданлыҡ

# ГРАЖДАНДАРҘЫ — милләттәрҙе Аллаһы Тәғәлә

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Ысынлап та, һуңғы ваҡытта илебеҙҙә гражданлыҡ һәм милли йәмғиәттәр мәсьәләләре хаҡында күп һөйләйҙәр. Был йәһәттән беҙ ҙә үҙебеҙҙең фекерҙе әйтергә бурыслыбыҙҙыр. Гражданлыҡ йәмғиәте - ул хоҡуҡи, сәйәси һәм әхлаҡи мәҙәнилеккә таянған кешеләрҙән торған йәмғиәт. Милек формаларының төрлөлөгө һәм тиңлеге, хеҙмәт һәм эшҡыуарлыҡ азатлығы, идеологик күп төрлөлөк, мәғлүмәт иреклеге, кеше хоҡуҡтарының һәм иркенең ҡаҡшамаҫлығы, үҫешкән үҙидара, халыҡтарҙың үҙбилдәләнешкә хоҡуғы, хоҡуҡи власть граждандар йәмғиәтенең төп элементтары булып тора. Гражданлыҡ йәмғиәте булдырыу өлкәһендә беҙ әле тәүге аҙымдар ғына яһайбыҙ. Беҙҙең илдә барлыҡ мәсьәләләр дәүләт органдары тарафынан хәл ителә, был осраҡта граждандарҙың төрлө йәмәғәт ойошмалары һүҙенә ҡолаҡ һалынмай тиерлек. Беҙҙә бер-бер артлы төрлө йәмәғәтселек ойошмалары барлыҡҡа килеп тора, шундай уҡ тиҙлек менән юҡҡа сығып тора. Бер генә миҫал: һуңғы осорҙа Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында төрлө бәхәстәр булып алды. Бер-бер артлы уның етәкселәрен алыштырып, бының менән уставыбыҙҙың төп принциптарына хилафлыҡ килтерә яҙҙыҡ. Былар барыһы ла административ органдарҙың ҡоролтай эшенә ҡыҫылыуы һөҙөмтәһендә килеп сыҡты. Хатта бер ваҡыт ошо ойошманың рәйесе булған Румиль Аҙнабаев уның йыйылышын алып барыуҙан ситләтелде. Әгәр ҙә админист-



гражданлыҡ йәмғиәте төҙөлә ала. Шул уҡ ваҡытта төрлө халыҡтар тарихында гражданлыҡ йәмғиәте традициялары булыуы хаҡында ла һүҙ алып бара алабыҙ. Әйтәйек, башҡорт халҡы үҙенең ҙур мәсьәләләрен хәл итер алдынан һәр ваҡыт йыйын йыйған. Ошондай йыйындарҙа халыҡ алдында торған проблемалар хәл ителгән. Яу сабырғамы, башҡа халыҡтарға ярҙам ҡулы һуҙырғамы - ошондай күп һандағы ҙур

**А. ЗАРИПОВ:** Башҡорттарҙың, рустарҙың аңында төп урынды коллективлыҡ төшөнсәһе биләй. Ысынлап та, элек ҡарарҙар йыйындарҙа һәм сходтарҙа күмәк халыҡ тарафынан ҡабул ителгән. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй халҡына хас сифат - өҫтән бойороҡ көтөп ултырыу. Батшалыҡ осоронда башланған был көрә-

***Бөгөн илебеҙ етәкселәре: "Гражданлыҡ йәмғиәте элементтарын беҙ үҫтерергә тейешбеҙ", - тип әйтә. Хөкүмәт, дәүләт быңдай йәмғиәтте бер нисек тә үҫтерә алмай. Әгәр ҙә улар был процеҫҡа тығылһа, был йәмғиәт юҡҡа сыға, йә булмаһа, улар тарафынан тәғәйенләп ҡуйылған кешеләр етәкселегендә формаль төҫ ала. Европа илдәрендә шәхси милекселек, эгоизм, индивидуализм көслөрәк, Көнсығыш илдәренә иһә коллективлыҡ хас. Шуға күрә Шәреҡ илдәрендә гражданлыҡ йәмғиәте элементтары бик һирәк күҙәтелә.***

йәмғиәте юҡ, бары тик гражданлыҡ йәмғиәтенең элементтары ғына йәшәй. Дәүләттәрҙә йәшәгән милләттәрҙең тарихи үҙаңы уянһа һәм һәр бер халыҡ үҙенең үҙбилдәләнеше хаҡында уйлана алһа, бер ваҡытта ла милли сәйәсәт юҡҡа сыҡмаясаҡ. Гражданлыҡ йәмғиәте граждан алдына ниндәй талаптар ҡуя һәм уның маҡсаты ниндәй? Берәй дәүләттә ысын мәғәнәһендәге гражданлыҡ йәмғиәте төҙөлдө икән, тип күҙ алдына килтерәйек. Ундай дәүләттә милләт, милли мәҙәниәт, милли тел үҙенән-үҙе юҡҡа сығасаҡ. Ул саҡта "милләт" төшөнсәһе беҙҙең һүҙлектән төшөп ҡалыуы ихтимал. Минеңсә, ал-

мәсьәләләрҙең хәл ителеше йыйын ҡарары рәүешендә ҡабул ителгән. Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ: Мәскәү дәүләте менән башҡорттар ниндәйҙер айырым шәхестәрҙең инициативаһы менән генә хәл ителмәгән. Илселәр Мәскәүгә барып ҡайтҡандан һуң шул уҡ йыйын алдында отчет та биргән. Рус дәүләте менән килешеү төҙөгәндә дингә, милли традицияларға, етәкселәрҙең кем тарафынан ҡуйылыу мәсьәләһенә ҡыҫылмау, ергә баҫып инмәү мәсьәләләре аҡҡа ҡара менән яҙылған. Шул уҡ ваҡытта башҡорт халҡы уртаҡ ил сиген дошмандан һаҡлау буйынса үҙенә бурыстар ҙа алған. Ул ваҡыттағы башҡ-

неш совет осоронда ла дауам итте һәм, дөрөҫөн әйткәндә, халыҡтың үҙаллылығы юҡҡа сығарылды, инициативаһы баҫыла барҙы. Ә инде халыҡтың фекере дәүләтебеҙ өсөн оло ҡурҡыныс янап, унан ҡорбан талап ителгән саҡта ғына ишетелде. Хәҙер инде Европа илдәре тарихына боролоп ҡараһаҡ, уларҙың тарихы икенсерәк юл менән барҙы. Сөнки Европа илдәрендә социаль ҡатламдар күберәк булған. Беҙ иһә, Рәсәй дәүләтенең феодаль осорон, мәҫәлән, ике ҡатламға ғына: крепостной крәҫтиәндәргә һәм феодалдарға ғына бүләбеҙ. Ә Европала азат кешеләр ҡатламы ла булған. Робин Гудты ғына

йәмғиәте күренешен тәшкил итә. Фәнил Сәйет улы иҫкә алған Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының барлыҡҡа килеүе лә гражданлыҡ йәмғиәте емеше. Сөнки үткән быуаттың 90-сы йылдарында милли хәрәкәт шул тиклем көслө булды. Ә бына гражданлыҡ йәмғиәте менән милли йәмғиәтте нисек итеп берләштерергә була һуң? Беҙ гражданлыҡ йәмғиәте тип әйтәбеҙ икән, ул сағында милләт төшөнсәһе иҫәпкә алынмай. Сөнки бер дәүләттең бар халҡы бер гражданлыҡ йәмғиәтенә ойошһа, уларҙы милли сифаттарына ҡарап бүлеп булмаҫ ине.

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Беҙҙең ил саф милли дәүләт була алмай. Шул уҡ ваҡытта был милли факторҙы, милли проблемаларҙы инҡар итеү тигән һүҙ түгел. Шулай булғас, гражданлыҡ йәмғиәте төҙөлгән осраҡта ла беҙҙең илдәге йөҙҙән артыҡ милләттәрҙең мәнфәғәтен күҙәтеүсе милли ойошмалар ҙа булырға тейеш. Ә беҙҙә иһә, милли мәнфәғәтте яҡлаусы ойошмаларҙың эшмәкәрлегенә милләтселек ярлығы тағыла. Бөгөн илебеҙҙә йәшәгән милләттәрҙең тормош-көнкүрешен сағылдырған бер генә үҙәк федераль телеканалы ла юҡ. Телеканал ғына түгел, милләт эштәре буйынса шөғөлләнгән Милләттәр эштәре буйынса министрлыҡ ойоштороу мәсьәләһе лә өлгөрөп етте. Хәҙерге Төбәктәр эштәре министрлығы был эштәр менән бөтөнләй шөғөл-

# ДӘҮЛӘТ,
## барлыҡҡа килтергән...

ләнмәҫй тиерлек. Беҙҙең республикала ла Мәҙәниәт министрлығын элеккесә Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы итеп үҙгәртеү фарыз.

**▸ Бында бер ҡапма-ҡаршылыҡ барлыҡҡа килә. Ни өсөн тигәндә, үҙ дәүләтен төҙөгән саҡта халыҡ милләткә әүерелә һәм һәр халыҡ үҙ милләтен һаҡлар өсөн ошо дәүләт механизмын барлыҡҡа килтерә. Шунан һуң тарихтың бер дәүерендә ошо дәүләттең нигеҙен граждандлыҡ йәмғиәте тәшкил итә башлаһа, был дәүләт үҙенең тамырына балта саба түгелме?**

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Минеңсә, граждандлыҡ йәмғиәте төҙөү идеяһы өҫтән төшөрөлмәй, уны төрлө милләт вәкилдәре үҙҙәренең мәнфәғәтен тормошҡа ашырыу маҡсатында барлыҡҡа килтерә. Милләт үҙенең проблемаларын ошо йәмғиәт аша дәүләт органдары алдында ҡуя. Әгәр ҙә дәүләт милли проблемаларҙы тейешенсә хәл итмәй икән, ысынлап та, Рәсәй дәүләте СССР дәүләте фажиғәһен ҡабатлауы бик ихтимал. Хәтерегеҙҙә булһа, үҙҙәренең милли проблемаларын үҙҙәре хәл итергә уйлаған Балтика буйы республикалары иң башта үҙҙәрен хужалыҡ иҫәбенә күсереүҙе һорап ил етәкселегенә мөрәжәғәт иткәйне. Ил етәкселеге уларҙың һорауына битараф ҡалды һәм был хәл һуңынан сәйәси һәм социаль мәсьәләләрҙе тыуҙырҙы. Әгәр ҙә тап ошо осорҙа ил етәкселеге милләттәр проблемаларын тейешенсә хәл иткән булһа, беҙ СССР-ҙы һаҡлап алып ҡалған булыр инек. Беҙ бөгөн дә "Рәсәйҙә йәшәгән халыҡтарҙың 20 проценты ғына рус булмаған милләттән", тип ошо милләттәрҙең проблемаларын хәл итеүҙән ситләшһәк, был хәл ҡапма-ҡаршылыҡты үҫтереүгә генә килтерәсәк. Мәҫәлән, Башҡортостан Рәсәй ҡаҙнаһына өлөш индереү буйынса оҙайлы йылдар буйына ун төбәк иҫәбендә булыуға ҡарамаҫтан, йәшәү кимәле буйынса 54-се урында тора. Беҙ милләттәрҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғы, суверенитет тураһында һөйләй башлаһаҡ, Башҡортостанды Рәсәйҙән айырырға тырышаһығыҙ, тип шау күтәрәләр. Был дөрөҫ түгел, сөнки беҙ суверенитет тураһында һөйләйбеҙ икән, бында республика халҡының үҙ аллы тормошо хаҡында һүҙ бара. Әгәр ҙә беҙ Өфө урамына асфальт һалабыҙ икән, ул юлдан башҡорт ҡына йөрөмәй, беҙ бөгөн "Өфө-арена" Боҙ һарайын һалып ҡуйғанбыҙ икән, унда ла барыһы ла йөрөй. Суверенитет хаҡында һүҙ алып барғанда мин иң тәүҙә ошо факторҙы иҫтә тотам. Сөнки беҙҙең ил ҡаҙнаһына индергән өлөшөбөҙ менән йәшәү кимәлебеҙ араһында ер менән күк араһындағы айырма. Шуға күрә беҙ киренән Конституциябыҙға милләтебеҙҙең үҙбилдәләнешкә хоҡуғы, республикабыҙҙың суверенлы булыу тураһындағы статьяларҙы өҫтәп ҡуйырға бурыслыбыҙ. Был мәсьәләне беҙ башҡа республикалар менән берлектә федераль органдар алдында күтәреп сығырға тейешбеҙ. Ошо мәсьәләне республикабыҙ яҙмышын ышанып тапшырған депутаттарыбыҙҙың береһе лә быҒаса Дәүләт Думаһы алдында күтәреп сыҡҡаны булманы.

**А. ЗАРИПОВ:** Хәҙерге ваҡытта илебеҙҙә генә түгел, бөтөн Ер шарында глобалләшеү бара. Бындай саҡта милли дәүләт, милли хөкүмәт төҙөп булмайҙыр, тип уйлайым. Сөнки ил эсендәге, донъя кимәлендәге миграция бер генә милләттең мәнфәғәте күҙәтелгән осраҡта конфликт ситуациялар барлыҡҡа килтерер ине. Был осраҡта, бер яҡтан ҡарағанда, толерантлыҡ яҡшы күренеш, әммә һәр төбәктә толерантлыҡтың үҙ йүнәлеше булыуы мотлаҡ. Әйтәйек, Башҡортостанда толерантлыҡ нисек булырға тейеш? Беҙ ҡасандыр Рус дәүләте менән килешеү төҙөгәнбеҙ икән, беҙ бер-беребеҙгә ҡарата ниндәйҙер вазифа алғанбыҙ. Мин ана шул вазифалар мәсьәләһенә киренән ҡайтырға саҡырыр инем. Был, ысынлап та, етди мәсьәлә. Бөгөн республикала иң күбен башҡорттар, урыҫтар һәм татарҙар тәшкил итә, һәм уларҙың үҙ-ара мөнәсәбәтен яйға һалырлыҡ бер ниндәй ҙә орган йә идаралыҡ юҡ. Ҡыҫҡаһы, һәр бер милли республиканың үҙенсәлеге бар. Ә беҙҙә илебеҙҙең һуңғы етәкселеге Рәсәй Федерацияһының барлыҡ төбәктәрен бер үк тараҡ менән тараны һәм тарай. Шуның өсөн беҙ граждандлыҡ йәмғиәте тураһында һүҙ алып барғанда һәр милләттең тарихын, милли үҙенсәлеген күҙ уңында тоторға тейешбеҙ. Әйтәйек, беҙҙә милли республикалар бар икән, ни өсөн уларҙағы төп милләттең хоҡуҡтарын тейешенсә яҡлаған ҡанундар юҡ?

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Социологик тикшеренеүҙәр шуны күрһәтә: беҙҙең республикала башҡорт халҡы социаль статусы буйынса һан яғынан күп булған ике милләт вәкилдәренә ҡарағанда түбәнерәк тора. Был уның йәшәйәшенең сифаты кимәлендә, юғары органдарҙа вазифа биләү кимәлендә һәм башҡа кимәлдәрҙә сағыла. Шуға күрә башҡорт милләтенең 70 проценттан ашыу өлөшө Башҡортостанда йәшәй икән, башҡорт милләтенең дөйөм төп мәсьәләләре ошонда хәл ителергә тейеш.

**▸ Фәнил Сәйет улының әйткән фекере беҙҙең гәзиттә күп тапҡыр күтәрелгән мәсьәләне тағы ла иҫкә төшөрә. Ул да булһа, һуңғы 20 йылда барлыҡҡа килгән "Башҡортостан халыҡтары" тигән юридик хата төшөнсә. Ябай ғына логика күҙлегенән ҡарағанда ла, әгәр ҙә теге йәки был территорияла теге йәки был халыҡтың 50 проценты һәм тағы ла бер кеше йәшәһә, унда шул халыҡ йә милләт йәшәй, тип әйтергә булыр ине. Был күҙлектән Башҡортостанда башҡорт милләте һәм башҡа милләттәрҙең вәкилдәре йәшәй, тиеү дөрөҫ буласаҡ. Шулай түгелме?**

**А. ЗАРИПОВ:** Бынан ун йыллап элек башҡорт ижтимағи ойошмалары йыйылыштарында был хәлгә ҡарата тәнҡит һүҙҙәре йыш әйтелде. Ысынлап та, беҙ үҙебеҙҙең еребеҙҙә йәшәйбеҙ һәм бында беҙҙең милләттең иң төп өлөшө йәшәй. 2000 йылдарҙа "Башҡорт милләтенең үҫеш концепцияһы" тигән документ бар ине. Аҙаҡ тағы ла "Башҡортостан халыҡтары үҫеше" тигән документ барлыҡҡа килде. Шунан тәүге документты матур итеп кенә ситкә һалып ҡуйҙылар ҙа, икенсе концепцияны беренсе урынға ҡуйҙылар. Былар барыһы ла дәүләт органдарында эшләгән чиновниктарҙың мәсьәләне дөрөҫ аңламауынан, был мәсьәлә менән шөғөлләнеүҙән ҡурҡыуҙан һәм наҙанлығынан килә. Был иң беренсе нәүбәттә ул ваҡытта эшләгән башҡорт милләтле чиновниктарға ҡағыла. Ысынлап та, башҡорт милләтенең үҫеш концепцияһы булырға тейеш. Башҡорт милләте үҙенең телен, мәҙәниәтен, иҡтисадын ошо республика нигеҙендә үҫтерә һәм һаҡлай алмаһа, уның таяныр башҡа урыны юҡ. Башҡорт милләтенең Башҡортостан шарттарында һаҡлаулы һәм яҡлаулы булыуы уның өҫтөнлөгө түгел, ә дәүләт тарафынан һаҡланыу механизмы. Беҙ урыҫ, татар, сыуаш, мари милләттәренең төп һәм дөйөм мәсьәләләрен Башҡортостан Республикаһында хәл итә алмайбыҙ. Был уларҙың эске эшенә ҡыҫылыу ҙа булыр ине.



> ***Беҙ үҙебеҙҙең еребеҙҙә йәшәйбеҙ һәм бында беҙҙең милләттең иң төп өлөшө йәшәй. 2000 йылдарҙа "Башҡорт милләтенең үҫеш концепцияһы" тигән документ бар ине. Аҙаҡ тағы ла "Башҡортостан халыҡтары үҫеше" тигән документ барлыҡҡа килде. Шунан тәүге документты матур итеп кенә ситкә һалып ҡуйҙылар ҙа, икенсе концепцияны беренсе урынға ҡуйҙылар. Былар барыһы ла дәүләт органдарында эшләгән чиновниктарҙың мәсьәләне дөрөҫ аңламауынан, был мәсьәлә менән шөғөлләнеүҙән ҡурҡыуҙан һәм наҙанлығынан килә. Был иң беренсе нәүбәттә ул ваҡытта эшләгән башҡорт милләтле чиновниктарға ҡағыла.***

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Күптән түгел "Башҡортостан Республикаһының милли сәйәсәт концепцияһы" тигән документ эшләнде. Ул әле ҡабул ителмәгән, ҡабул ителер тип уйлайым. 90-сы йылдарҙа Рәсәй Федерацияһында эшләнгән концепция иҫкерә төштө, шуға күрә яңы осорҙоң үҙенең милли сәйәсәт концепцияһы булырға тейеш, тип уйлайым. Хәҙерге ваҡытта бер генә фирҡәнең дә милли мәсьәләләрҙе хәл итеү программаһы юҡ. Бындай концепция федераль кимәлдә лә, һәр бер республикала ла ҡабул ителергә тейештер, тип уйлайым. Сөнки һәр бер республиканың үҙ милли үҙенсәлеге бар. Әгәр ҙә беҙ барлыҡ милләт вәкилдәренең төп хоҡуҡтарын яҡлау буйынса федераль кимәлдәге мәсьәләләрҙе үҙебеҙҙең елкәгә йөкмәһәк, бер нәмәгә лә өлгәшмәйәсәкбеҙ, бынан башҡорт милләте зыян ғына күрәсәк. Шуға күрә был яңы концепцияла башҡорт милләтенең үҫеш мәсьәләләре хаҡында арыу ғына әйтелә. Үкенескә ҡаршы, әлеге ваҡытта был мәсьәләләр менән тейешенсә әҙер булмаған кешеләр шөғөлләнә, был кадрҙар мәсьәләһе проблемаһын иҫкә төшөрә. Әлеге ваҡытта беҙҙең республикала перспективалы етәксе булырҙай йөҙ кешенең исемлеге төҙөлгән. Миңә шул исемлекте тәнҡит күҙлегенән ҡарап сығырға тура килде. Ҡайһы бер кешеләрҙең ул исемлеккә ниндәй юлдар, ниндәй ойошмалар аша килеп инеүе аңлашылмай. Унда ил, республика яҙмышы менән янып йәшәүсе патриотик рухлы кешеләр инергә тейеш, тип уйлайым. Уларҙың профессиональ әҙерлеге генә түгел, патриотик рухы мөһимерәк, минеңсә. Патриотик рухлы кешене профессиональ итеп әҙерләү профессионалдан рухлы патриот әҙерләүгә ҡарағанда күпкә еңелерәк. Рухһыҙ кешене етәксе итеп ҡуйыу илде, республиканы фажиғәгә алып килә.

**▸ Мин үҙем Баймаҡ районының Буранбай ауылынан. 1914 йылдағы герман һуғышында йөрөгәндә Билал Азаматов атлы олатай бар донъяһы янып, туғандары һәләк булып, етем ҡалған Зоя исемле поляк ҡыҙын осрата һәм уны йәлләп, үҙе менән тыуған яғына алып ҡайтҡан. Әммә ул ҡыҙ, ауылыбыҙ йәмәғәтселеге талабы буйынса, башҡорт телен өйрәнгәнсе, Ислам динен ҡабул иткәнсе, күрше ауылда йәшәргә мәжбүр булған. Һуңынан ҡәҙимге беҙҙеңсә һөйләшергә өйрәнеп, Ислам динен ҡабул итеп, Зөлхизә исемен алғас ҡына ауылыбыҙ аҡһаҡалдары Билалға уны кәләш итеп ауылға алып ҡайтырға рөхсәт иткән. Бында дин тотоусыларҙың да роле ҙур булғандыр, әммә был хәл йөҙ йыл элекке ауылыбыҙҙа башҡорт йәмғиәтенең ҙур көскә эйә булыуы хаҡында ла һөйләй. Ә бына бөгөн килеп беҙ хатта үҙебеҙҙең етәкселәрҙе лә туған телебеҙҙә һөйләштерә алмайбыҙ...**

**Ф. ФӘЙЗУЛЛИН:** Бик ҡыҙыҡ һәм фәһемле факт. Владимир Владимирович, ахыры, Баймаҡ районының Буранбай ауылында барлыҡҡа килгән традицияларҙы өйрәнгәндер. Ул үҙенең һуңғы сығыштарының береһендә милли мәсьәләләрҙе бер ни тиклем тар юҫыҡҡа төшөрҙө, йәғни миграция мәсьәләләрен бер ни тиклем көйләү тураһында һүҙ алып барҙы. Әммә миграцияны көйләү менән генә милли мәсьәләләр хәл ителмәйәсәк. Миграция беҙҙә күп кенә проблемалар тыуҙыра. Әйтәйек, беҙҙең халыҡ юғары квалификация талап ителмәгән эшкә барыу яғында түгел. Шуға күрә Урта Азиянан, Әзербайжандан килгән кешеләр беҙҙәге ана шул буш урынды тултыра. Тимәк, миграция алдағы йылдарҙа ла беҙҙең алда ҙур проблемалар тыуҙырасаҡ. Бөгөн ҡайһы бер статистик мәғлүмәттәргә ышанып ҡарағанда, Мәскәү тирәһендә генә ике миллиондан артығыраҡ рәсми яҡтан теркәлмәгән мигранттар эшләй. Был бик ҙур һан. Әлбиттә, был йәһәттән мәсьәлә өйрәнелеп, тейешле закондар ҡабул ителергә тейеш. Беҙ үҙебеҙҙең илебеҙҙә иҡтисади, сәйәси һәм рухи тормошобоҙ менән бәйләнгән проблемаларҙы үҙебеҙ хәл итеү юлынан китергә бурыслыбыҙ. Ни өсөн тигәндә, илде мигранттар ярҙамында ғына һаҡлап ҡалыу мөмкин булмаясаҡ. Бөгөнгө социаль-иҡтисади яҡтан айырмалыҡтарҙы бөтөрөү юлында барырға тейешбеҙ. Был, әлбиттә, төрлө дәүләттәрҙән, республикаларҙан килгән милләт вәкилдәренең традицияларынан баш тартыу тигән һүҙ түгел. Беҙгә килгән мигранттар рус телен, әлбиттә, белергә тейеш. Әгәр ҙә ул рус телен белмәй икән, урындағы халыҡ менән тейешле кимәлдә аралаша алмай, ярым ҡол хәлендә ҡалыуы бар. Шул уҡ ваҡытта, әгәр ҙә улар беҙгә килә икән, беҙҙең милләттең тарихын һәм традицияларын бер ни тиклем белергә бурыслы. Был проблемалар, мәҫәлән, Европала закон кимәлендә хәл ителә. Германияға барып йәшәйем, тиһәң, иң беренсе талап: урындағы телде, германдарҙың тарихын белеү.

**(Дауамы 11-се биттә).**

***✓ Нишләп биреште әле, йәшәйеше түңәрәк, күңеле бөтөн, тимәк, тормош дауам итә. Фатирында көткән шатлыҡ-ҡыуаныстарға һуңлап ҡуйыуҙан ҡурҡҡан Нур Мәхмүтов ҡабаланып ҡайтыу яғына атланы.***






Трестың генераль директоры оҙон-оҙаҡ доклад менән сығыш яһаны, тик Нур ҡатмарлы һөйләмдәрҙе, ят терминдарҙы, өҙлөкһөҙ ҡабатланған һандарҙы, процентарҙы аҙағынаса аңлап-төшөнөп тә бөтмәне. Етәксе сығышында өҫтәл артына күҙ ташлап түрҙә ҡуҡырайған төп ҡунаҡҡа бер нисә тапҡыр рәхмәтен белдерҙе. Шуны ғына көткән, алдан билдәләнеп иҫкәртелгәндәр аяғөҫтө тороп, ҡул сабырға тотондолар, ҡалғандар, теләр-теләмәҫ кенә ҡалҡып быларға эйәрҙе. Ялҡытҡыс сығыштан һуң бүләкләүҙәр башланды. Ошо мәлде көткән Нур Сәлимович, күрмәй ҡалмағыҙ, мин бында, тигәндәй, ҡалҡына биреп ҡуйҙы. Тик күпме генә көтһә лә унын исем-шәрифе ишетелмәне: дәрәжәле исемдәр, шөһрәт танытмалары, бүләкләүҙәр әле треста эшләп йөрөүселәргә тәтене. Аңлашыла, улар бит яҡшымы-яманмы төҙөлөштөң бөгөнгө йөҙөн, унын абруйын билдәләй. Нимәгә бушҡа ымһынды, ҡартайған көнөндә бала-сағa ише шалтырауыҡҡа алданды? Ҡыҫыр өмөт ҡыуып килтереүен бында килгәс кенә төшөндө. Ул бөгөнгө көндә бер кемгә лә кәрәкмәй, ул - янып бөткән утындың эшкә ашмаған торомбашы, һуты һығып алынып ҡыйлыҡҡа ырғытылған лимон...

"Улар беҙҙең төҙөлөшкә нигеҙ һалдылар, тырыш хеҙмәттәре менән тресыбыҙҙы яңы бейеклектәргә күтәрҙеләр..." Бәй, саҡыралар түгелме? Уға эйәреп сәстәренә сал ҡунған, тормош ярайһы уҡ таушалтҡан тиҫтәгә яҡын кеше аҡһай-туҡһай сәхнәгә үрмәләне, текә баҫҡыстарҙан күтәрелеүгә лә апаруҡ ваҡыт китте. Тамашасылар ризаһыҙ шаулашып ҡуйҙы. Теҙелешеп баҫтылар. Бая уны ҡаршы алған ҡыҙый сәхнә артынан сығып ҡосағындағы ҡәнәфер шәлкемен өләшергә тотондо. Уға һабағы бил быуарынан һыныҡ төҫһөҙ генә сәскә эләкте... "Килеп йөрөгөҙ, һеҙҙең тәжрибә, оҫталыҡ беҙгә һәр ваҡытта ла кәрәк..." Был һүҙҙәр, күрендегеҙ, етте, бар төшөгөҙ, тигәнде аңлата ине шикелле. Сәхнәләгеләр, бәй, бөттөләме, тигән һымағыраҡ аңшайып торалар ине, белекһеҙҙәрҙе етәкләп төшөрә башланылар. Нур урынына йүнәлгәндә урта төштә ултырған Ғәфүрҙе күреп ҡалды. Ул уға түбәнһеткәндәй мыҫҡыллы йылмайып ҡарай ине. "Саҡырмаһалар ҙа килгән, ишектән ҡыуылып, тишектән инә торған әҙәм инде..." Урынына һеңде. Тәнен аңлата алмаҫлыҡ ауыр көс түбәнгә тарта, йөрәге сәнсә, күңеле һис ваҡытта булмағанса һыҡрай... Ары шайтан туйын хәтерләткән заманса концертты ла күрмәне, ҡолаҡ тондорғос көслө музыканы ла ишетмәне, көйәнтәләй бөгөлөп, ҡасан ғына был мәхшәр тамамланыр икән, тип ойоп тик ултырҙы.

Театрҙан сыҡты ла уны көткән табынға туралап ҡайтҡыһы килмәй, ҡала уртаһында урынлашҡан паркҡа йүнәлде, урта эскәмйәләрҙең береһен биләне. Көҙ һулышы үҙ хакимлығына ингән, һалҡынайта төшкән, үткер ел үтәләй һуға. Яртылаш ысҡындырылған төймәләрен ҡаптырып, пальтоһының яғаһын торғоҙҙо, эшләпәһен батырынҡырап кейҙе лә тәү ҡат күргәндәй тирә-яғына иғтибарлап күҙ атты. Ана, унын ҡарағасы. Ул замандарҙа даими үткәрелә килгән өмә мәлендә ултыртҡайны сибек кенә нәмәне. Башта төҙөүсе йәштәр шау-гөр килешеп машинаға тейәлешеп урманға сыҡтылар: кемеһе ҡайын, ҡарағай үҫентеһен һайланы, бәғзеләре муйыл, сейә ҡыуаҡтарын үҙ итте, ә ул беләк буйы ошо ҡарағас йоратына барып йәбеште, был ағас тупраҡ алыштырыуҙы үҙ-һенмәй, теймә, ҡорой бит ул, тип кире һүреүселәрҙең һүҙҙәренә лә ҡолаҡ һалманы. Ере ҡаты, ташлы булһа ла һис бирешмәй үҫеп киткән ана. Тик замана елдәре уны ла ситләп үтмәгән, һарғайып ҡатҡан энәләрен ҡойған яланғас ағастың аҫҡы бер нисә ботағы олон төбөнән һынған, шуғалыр ул ҡанаты ҡайырылған зәғиф ҡошто хәтерләтә... Арыраҡ үҫкән тирәк балта оҫтаһы Ғәнейҙеке. Тормошто, туғандарын яратҡан, ғаиләһе, тип йән атҡан кеше ине ул, йәшләй генә китеп барҙы. Бынауһы буяусы Сәжидәнеке. Ул төҙөлөштә саҡта сыңғырҙаған көлөү һәр саҡ ҡолаҡта яңғырап торҙо, хәҙер ҡаты сирләй тип ишеткәйне. Күпме йыйына барып хәлен белергә, ваҡыт ҡына таба алмай. "Бер нәмәгә ҡарамай, иртәгә үк барып сығам..." Теге йүкә ағасы бульдозерсы шомбай Байназарҙыҡы. Солоҡ умартаһылай бәһлеүән ир ине ул заманында, бая сәхнәлә ҡураныс ҡына һерәйеп, бәлйерәп төшкән йөк унын уҡыуына кире йоғонто яһаманы, уҡыуға сос, отҡор булды, тик шаян шуҡлығы, тәртибе генә тырышлығын юҡҡа сығара ине.

Хәтерендә, мәктәпте тамамлаған йылы класс етәксеһе көтмәгәндә уларға килеп инде. Тағы ла улы берәй хилафлыҡ ҡылғандыр, тигән ҡиәфәттәге әсәһе саҡырылмаған ҡунаҡты түргә әйҙүкләне лә уға борсолоулы текәлеп, ҡаршыһына урынлашты. Уҡытыусы тынысландырырға ашыҡты:

Эргәгеҙҙән үтеп барҙым да боролоп инеп хәлегеҙҙе белергә иттем.

- Һеҙҙе күргәс, Нур тағы ла мәктәптә берәй эш боҙоп ҡуймағайы, тип һипһенеп ҡалдым. Тиктормаҫ ҡулсырлыҡ бар бит унда.

- Унығы раҫ. Шулай ҙа тиҙҙән тиктормаҫ уҡыусыларым мәктәпте тамамлап сыҡһалар, һағынырмын, юҡһынырмын әле. - Берауыҡ өндәшмәй ултырҙы. Бер яҡ ситтә күлдәген үтекләп аҙапланған Нур үҙҙәре генә һөйләш-

баҫып торасы, ышанғы ла килмәй. Кисәнән һуң күҙ йәшереп үсеккән сабыйҙай ҡасып сығып барғансы, тиңдәштәренең хәлен белеп, бер аҙ һөйләшеп алһа ни булған? Ымһынды. Икенсе тапҡырға ымһынды. Ҡыҫыр өмөт рәнйеш һымаҡ күңелгә инеп оялай икән ул. Онотолмай.

Нурҙы әсәһе генә тәрбиәләп үҫтерҙе, атаһы ул иҫ белгәндә ғаиләһен ташлап сығып китеп, Гөлзәйнәб исемле икенсе ҡатынға күсенеп сыҡҡайны. Бер ауылда йәшәгәс, андабында бер инеп сыға ине ул.Тик һүҙҙәре лә, кәңәштәре лә берекмәне, ата менән ул араһында күҙгә күренмәгән һалҡынлыҡ инеп оялағайны шул. Атайһыҙ үҫкәнгәме, ҡатымһаҡ булды Нур, тиҫтерҙәренән өлөш ашатып, уларға бирешә һалып барманы, үҙенең хаҡлығын әсе теле менән дә, кәрәк саҡта йоҙроҡ көсө менән дә иҫбатланы. Эшкә лә оһолло булды, сөнки йорт мәшәҡәттәре, кәртә-ҡура тирәһе тулыһы менән унын өҫтөндә, дауаханала ашнаҡсы булып эшләгән әсәһенең ваҡыты ла юҡ ине шул. Ҡара таңдан сығып китә лә, кис, ҡараңғы төшкәс кенә арып-талып ҡайтып инә. Саҡрым тирәһе текә тау түбәнендәге шишмәнән көйәнтәләп һыу ташыу, ҡул менән утын бысып дауаханала ятҡан өс тиҫтәнән ашыу ауырыуҙы көнөнә өс тапҡыр ашатыу, шунса тапҡыр ҡашығаяҡ йыуыу еңелдән түгел. Мәктәптән сыға ла әсәһенә ярҙамлашырға йүгерә. Тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ эште икәүләп башҡарғанда саҡ өлгөрәһең әле! Нурҙың сибек иңенә

мәксе ахры, тип аңлап сығырға иткәйне, Сәүиә апаһы туҡтата һалды:

- Икегеҙҙе бер юлы тап итеп арыу булды әле. Изге хәбәр менән йөрөйөм. Бөгөн педсовет үтте. Уҡытыусыларҙың фекере шундайыраҡ, фәҡәт берәүгә генә тапшырыла торған быйылғы Маҡтау ҡағыҙы Фәһимгә йә Нурға бирелергә тейеш. Фәһим уҡыуҙан артыҡ алдыра алмаһа ла тәртибе һәйбәт, ә Нур - киреһенсә... Сирек аҙағынаса ошо ике кандидатураның тик береһе генә һайлап алынасаҡ. Маҡтау ҡағыҙы эләккән уҡыусының юғары уҡыу йортона ауырлыҡһыҙ инеүе билдәле. Тырыша күрһен инде Нур, шуны әйтергә килдем. Миңә ҡалһа, күңелем һиҙә - Нурға эләгер ул бүләк.

Класс етәксеһен оҙатҡас, әсәһе ҡыуанып һөйләнергә тотондо:

- Уҡыу йылы тамамланыуға ла күп ҡалманы, балам, тырыша күр инде. Кемдеке - шуныҡы, күрһендәр бөтәһе лә, минең улым да төшөп ҡалғандарҙан түгел. Грамотаны анау Гөлзәйнәбтең Гөлнурына инселәмәйҙәр бер ҙә, һиңә бирергә итәләр.

- Юҡҡа ымһынма, әсәй, Фәһимдең атаһы бит директор, уҡытыусыларҙың кемде яҡлары көн кеүек асыҡ! - Әсәһен кире һүрергә тырышҡан Нур ҡул ғына һелтәне.

- Сәүиә апайың бер ҙә юҡҡа килмәгәндер, әҙерләнә торһондар, тип иҫкәртергә һуғылғандыр.

Уңыштар, күтәрмәләүҙәр ылғый эләгеп бармаған, башын баҫып йөк атылай иртәнән алып кискә тиклем дауахана менән өйҙәре араһында көндәрен үткәргән, ауылдан ситкә сығып әйләнергә лә ваҡыт тапмаған әсәһе дәртләнеп китте шулай. Эш хаҡына үҙенә сәскәһе ҡалҡып күренгән крепдешин күлдәк, аяҡтарына килешле туфлиҙар һатып алды, Нурҙы ла үтә тырышып әҙерләне, тотонолған ике бәрәндең аҡсаһы тотошлайы менән уны кейендереүгә китте. Сөм ҡара костюм-салбар, көлһыу төҫтәге күлдәкте кейеп, затлы галстук тағып ебәргәс...

Бына һуңғы ҡыңғырау көнө етте. Кейенеп-яһанып мәктәпкә йүнәлделәр. Әсәһе иң алғы урындарҙың береһен биләгән, әйтерһең, бүләк улына түгел, фәҡәт уға эләгә. Бына көтөп алған мәл, хәҙер бәхет тәтегән сығарылыш класс уҡыусыһын уртаға саҡырасаҡтар... Класташы Фәһимдең исем-шәрифе яңғыраны. Нурҙың аяғының аҫтында ер убылдымы ни, салт аяҙ күк йөҙө, йәмле иртә күҙ менән ҡаш араһында бөләнгертләнде. "Ғәрлек... Оят... Үҙе генә мәсхәрәгә ҡалһа ни хәл, әсәһен ымһындырҙы..."

Һуңғы ҡыңғырауҙан һуң һабаҡташтары Һаҡмар буйына йүнәлде, ә ул шаулы төркөмдән айырылып, ауылдан алыҫ түгел ҡалҡып күренгән Аҡ ҡая яғына ҡайырылды. Оҙаҡ суҡайҙы ҡая үркәсенә атланып, тик таштан килгән һалҡынлыҡ зиһенен сафландырманы. Йәнен ошоғаса кисереп ҡарамаған бушлыҡ һәм һыҙланыулы әрнеү биләгәйне. Бынан ары ла бик күп тапҡырҙар ошо хәлдә тороп ҡаласаҡ әле ул, ымһынып та ала алмаған, бик теләп тә өлөшөнә төшмәгән һемәйеү тойғоһон кисерәсәк.Шунда ғына, был тормош тигәнең табыштар, еңеүле артылыштарҙан ғына түгел, үкенеүле юғалтыуҙарҙан тороуын да бөтә тәрәнлегендә аңлаясаҡ. Әлегә ул моңһоу, һүнгән ҡарашын билдәһеҙлеккә төбәгән. Ҡояш байыу яғына ауышты, ағастар осона һаҡты, ары ығышып офоҡ ситенә ҡарай тәгәрәне, шунан бер аҙҙан ер өҫтөнә үтә күренмәле эңер шаршауы тартылды. Күпме былайтып боҫорға мөмкин, таш өҫтөнән түбәнгә һикерҙе лә, теләр-теләмәҫ кенә ауыл яғына ыңғайланы. Ҡайтып инде лә шым ғына сисенә башланы. Битәрләү, әрләүҙе көткән Нур баҫалҡы өндәшеүҙе ишетте:

- Ҡайҙа йөрөйһөң улай һуңлап, ә мин йоҡом ҡасып, һине көтөп ятам. Өҫтәлгә көрөшкә менән һөт ҡуйғанмын, яңы бешеп сыҡҡан икмәк тә шунда, тәғәмләнеп ал.

Нур түшәгенә ятты ла тынып ҡалды, бына, ниһайәт, иртә таңдан тамағына тығылған төйөн һытылды, сикәләрен ҡайнар йәш бешерҙе...

Бик күп йылдар үткәс, үлем түшәгендә ятҡан әсәһенең алдына башын эйҙе Нур:

- Теге саҡ шөһрәт танытмаһын ала алманым, әсәй, ғәфү ит...

Һүҙҙең ни хаҡында барыуын тиҙ төшөнөп алды әсәһе.

- Һин һәйбәт ул булдың, балам, көнитмештә ундай хәлдәр йыш ҡабатланыр, яҙмыш бит ул, һәммәһен дә ғорур кисерә бел...

Нур Сәлимович шул әйтелгәндәрҙе әле генә ҡабаттан, апасыҡ итеп ишеткәндәй һиҫкәнеп китте. Теремекләнеп, башын ҡалҡытты, пальто яғаһын төшөрөп, эшләпәһен өҫкә ҡарай этте. Нишләп биреште әле, өйҙә уны яратҡан ҡатыны көтә, балалары, ейәне ҡунаҡҡа килгән. Йәшәйеше түңәрәк, күңеле бөтөн, тимәк, тормош дауам итә. Фатирында көткән шатлыҡ-ҡыуаныстарға һуңлап ҡуйыуҙан ҡурҡҡан Нур Мәхмүтов ҡабаланып ҡайтыу яғына атланы.

**(Аҙағы).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИСЕМЕҢӘ ҠАРАП...

## үҙеңде баһаларҙар

■ Takzdorovo.ru сайты белдереүенсә, быйыл Яңы йыл байрамдары мәлендә рәсәйлеләр спиртлы эсемлектәрҙе аҙыраҡ ҡулланған. Үткәрелгән һорау алыуҙарҙан күренеүенсә, 34,7 процент кеше йыл дауамында алкоголде һирәк эсә, 23,2 проценты бөтөнләй эсмәй. Яуап биреүселәрҙең 19,3 проценты ҡышын һирәгерәк эсеүен белдергән. Ҡышын 8,3 процент кеше күңелһеҙ булған өсөн, ә 4,4 проценты йылынып өсөн эсә.

■ Исемегеҙҙе әйтеүе ни тиклем еңел булһа, шул тиклем эшкә урынлашыу һәм яңы дуҫтар табыуы еңелерәк буласаҡ. Нью-Йорк һәм Мельбурн университеттары тикшеренеүселәре былдай ҡыҙыҡлы һығымтаға үткән һайлауҙарҙың һайлау бюллетендәрен өйрәнгәндән һуң килгән. Исемдәре еңел әйтелгән сәйәсмәндәр башҡа оппоненттарына ҡарағанда күберәк тауыш йыйған. Тикшеренеүҙәрҙең авторы Саймон Лахам билдәләүенсә, бында исемдең оҙонлоғо ла, уның "сит тел"дә яңғырауы ла түгел, ә тап уның еңел әйтелеүе мөһим.

■ Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы һәм Еврокомиссия белгестәре белдереүенсә, үлем һәм ауырыу тыуҙырыу сәбәптәре исемлегендә беренсе урында бысранған һауа, икенсе урында тауыш тора. Баҡтиһәң, тауыш хатта йоҡлаған саҡта ла ҡан баҫымын, стресс гормондары күләмен күтәрә икән. Ййлап был ауырыуҙар ҡан тамырҙарының тарайыуына һәм йөрәк ауырыуҙарына килтереүе ихтимал.

■ Британия тикшеренеүселәре фекеренсә, төрлө проблемаларҙан ҡотолоу өсөн картиналар галереяһына йыш йөрөү ҙә етә. Бигерәк тә донъя һынлы сәнғәте ҡомарҡтылары кеше психикаһына ыңғай тәьҫир итә. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, Клод Моне йәки Сандро Ботичелли кеүек бөйөк рәссамдарҙың һүрәттәрен ҡараған саҡта кешенең баш мейеһе әүҙемлеге ғашиҡ булғандағы мейе торошона оҡшаған була. Бынан тыш, тикшеренеүҙә ҡатнашыусыларҙың ҡанында домафин гормоны ла күберәк була, был гормон кеше ниндәйҙер кинәнес кисергәндә бүленә. Былдай реакция тикшереүҙәрҙә ҡатнашыусының һәр береһендә күҙәтелә. Эксперттар әйтеүенсә, сәнғәт өлгөләре ҡурҡыу, тынысһыҙланыу кеүек тойғоларҙан арынырға һәм хатта ауыртыуҙан ҡотолорға ярҙам итә.

■ Имбир тамырында 3 процентҡа тиклем эфир майҙары һәм күп төрлө аминокислоталар бар. C, A, B1, B2 витаминдары, шулай уҡ цинк, кальций, калий, натрий, тимергә бай был тәмләткес баш мейеһен кислород менән байыта һәм артериаль ҡан баҫымын төшөрә, матдәләр алышыныу процесын нормалләштерә. Имбир сәйен бигерәк тә миҙгелле сирҙәр киҫкенләшкән ваҡытта эсергә тәҡдим итә белгестәр.

■ Британияның Бристоль университеты ғалимдары әйтеүенсә, баланың аҡыл ҡеүәһе үҫеше уның бәләкәй сағында нисек туҡланыуына бәйле. Өс йәшкә тиклем "зарарлы" аҙыҡ-түлек ашаған балаларҙы биш йылдан һуң тикшереп ҡарағандар һәм интеллект коэффициентының тиҫтерҙәренекенә ҡарағанда түбәнерәк булыуын асыҡлағандар. Ғалимдар әйтеүенсә, өс йәшкә тиклем балаға "дөрөҫ" аҙыҡ биреү мөһим, сөнки мейе йәшәүҙең тәүге өс йылында әүҙем үҫешә.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# КЕШЕ ҮҘЕ ЛӘ МӨҒЖИЗӘ



Берҙән-бер көндө ҡылған доғалары ҡабул булып, ҡулдары менән мөғжизә күрһәтә ала торған дин әһеле үҙенең шәкерте менән урман буйлап китеп барһа, юлдарына данлыҡлы бер бай осрай. Ул дин әһеленә мөрәжәғәт итеп, шундай һорау бирә:

- Һине, бик мөғжизәле кеше, тип һөйләйҙәр. Һин ысынлап та кеше эшләй алмаҫлыҡ эштәрҙе лә эшләй алаһыңмы?

- Минең кеүек оло йәштәге ҡарт ниндәй мөғжизә күрһәтә алһын инде, үҙең уйлап ҡара! - тип, яуап ҡайтара дин әһеле.

Бай тағы ныҡыша:

- Кешеләр бит һине ҡаты ауырығандарҙы, һуҡырҙарҙы, һаңғырауҙарҙы, хатта аҡылһыҙҙарҙы ла дауалай алаһың, тип һөйләй...

- Былдай ғәмәлдәрҙе бик көслө кеше генә эшләй ала. Мин бер ябай ғына ҡартмын. Мин ауырыуҙар өсөн ҡөҙрәтле Аллаһы Тәғәләнән ярҙам ғына һорайым. Был мин булдырырлыҡ эш. Ә был эште һәр бер иманлы кеше булдыра ала, - тип яуап ҡайтарған ҡарт.

- Доға ҡылғандан һуң доғаларым ҡабул булһын өсөн минең дә һинең кеүек иманлы булғым килә. Эй, нурлы йөҙлө ҡарт, Раббыбыҙға ҡарата иманыбыҙ артһын өсөн берәй мөғжизә күрһәт әле, - тип һорай бай.

- Бөгөн иртән ҡояш ҡалҡтымы?

- Әлбиттә, ҡояш ҡалҡты.

- Бына был - мөғжизә, - ти дин әһеле.

- Минең ысын мөғжизә күргем килә. Ҡояшты ҡаплап, ташты ҡыҫып, һыу сығарып күрһәтһәң ине. Ана, ҡыуаҡтар артында ҡуян яраланып ята, уның яраһын төҙәт булмаһа, - ти бай.

- Ысын мөғжизә күрергә теләйһеңме? Күптән түгел генә ҡатының бала тыуҙырҙы түгелме әле?

- Эйе, минең улым тыуҙы.

- Бына был - икенсе мөғжизә, тормош мөғжизәһе, - ти ҡарт.

- Эй, хикмәт эйәһе, һин мине аңламаның, буғай. Минең үҙ күҙҙәрем менән бер генә булһа ла ысын мөғжизә күргем килә, - тип һаман ныҡыый бай.

- Хәҙер бит уңыш йыйыу осоро, шулаймы? Ҡара әле иген баҫыуына, ә бит күптән түгел бында бер ни үҫмәй ине. Бына был - өсөнсө мөғжизә, - ти ҡарт.

- Мин һиңә аңлата алманым, буғай. Мин... - бай һүҙен тамамлап өлгөрмәй, ҡарт уны бүлдерә һәм шулай ти:

- Һин бик яҡшы аңлаттың. Ләкин мин нимә эшләй алам, шуларҙың барыһын да эшләнем, ә инде һин эҙләгәненде таба алмағанһың икән, мин нимә эшләй алам инде?

Был һүҙҙәрҙе ишеткәс, бай мөғжизә күрә алмағанына күңелһеҙләнеп, ҡарттан төңөлөп, үҙ юлы менән китеп барған. Бай күҙҙән юғалғас, ҡарт яраланған ҡуянды ҡулына алып, доға ҡылып, яраһына өргән, ҡуян шунда уҡ сабып киткән. Янындағы шәкерте аптырап:

- Хөрмәтле уҡытыусым! Мин һинең янында йөрөгәндә көн һайын былдай мөғжизәне күреп торам. Тик ни өсөн һин әлеге байға бер генә булһа ла мөғжизә күрһәтергә теләмәнең? Ни өсөн быны ул күрмәгәндә эшләйһең? - тип һорай.

- Сөнки әлеге бай мөғжизә түгел, ә тамаша эҙләне. Мин уға өс мөғжизә күрһәттем, ул уларҙы күрергә лә теләмәне. Хикмәт эйәһе булыу өсөн иң элек шәкерт булыу кәрәк. Тормоштағы бәләкәй мөғжизәләргә баһа бирмәйенсә, бер ни ҙә эшләмәйенсә, ҙур мөғжизәләр күрергә хыялланыу, әлбиттә, бик сәйер...

Эй, хөрмәтле дуҫым! Мөғжизә төшөнсәһенә бәйле был риүәйәт менән танышҡандан һуң, шул турала ла аңлатма биргем килә. Ер йөҙөндәге мөғжизәләрҙе өс өлөшкә бүлергә мөмкин.

Беренсеһе - Аллаһы Тәғәлә Үҙенең көсө, ҡөҙрәте, хикмәте менән яратҡандар - барыһы ла мөғжизә. Мәҫәлән: ҡояш - кешеләргә йылыһын, яҡтылығын бирә. Ҡояш һис шикһеҙ Аллаһы Тәғәләнең көсөн күрһәтеүсе оло бер мөғжизә; ер - уға орлоҡ сәсһәк, үҫемлек пәйҙә була, ул тәнгә сихәт биреүсе емештәр бирә. Был күренеш тә - мөғжизә.Шулай уҡ Аллаһы Тәғәлә ҡөҙрәтен күрһәтеүсе мөғжизә - Кеше үҙе. Былдай миҫалдарҙы бик күп килтерергә була.

Икенсе төр мөғжизәне Аллаһы Тәғәлә бәйғәмбәрҙәренә һәм Үҙенең илселәренә насип итә. Йәғни уларға бөтә кеше лә булдыра алмай торғандарын башҡарырға ҡөҙрәт бирә. Йәки Аллаһы Тәғәлә бәйғәмбәрҙәренә Үҙенең илселәре итеп раҫлар өсөн мөғжизә биргән.

Өсөнсө төр мөғжизә кирамәт тип атала. Уны Аллаһы Тәғәлә үҙенә яҡын булған ҡолдарына, әүлиәләренә, дуҫтарына насип итә. Мәҫәлән, кешенең күңелендә йәшерен фекерҙәрҙе күрә белеү - былар барыһы ла Аллаһы Тәғәләнең ярҙамы, рөхсәте менән эшләнә.

Мөғжизәгә бәйләп тағы шуны әйтергә кәрәк. Мөғжизәгә оҡшаған тағы ике төрлө нәмә бар. Береһе - сихыр, кешеләр тарафынан шайтандар ярҙамында бик ҙур гонаһҡа батып эшләнә торған эш. Икенсеһе - фокус: ҡул оҫталығы ярҙамында кешеләрҙең күҙҙәренә ялған төтөн ебәреп барлыҡҡа килтерелгән күренештәр. Былар мөғжизәгә инмәй.

Аллаһы Тәғәлә барыбыҙға ла мөғжизәләрҙе күреп ғибрәтләнеп, иманыбыҙҙы арттырып йәшәргә насип итһә ине.

**Мәхмүт Шәрәфетдиновтың "Бәхетлеләрҙең серҙәре" китабынан**
**Бибинур ҒИЗЗӘТУЛЛИНА әҙерләне.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ЙӘМҒИӘТ – РӘХИМЛЕЛЕК,

## тарҡалыу һәм бәхәстәр – яза

**Кешенең Исламға ярашлы йәшәү шарттарының береһе - ул йәмғиәттә берҙәм булыу.**



Ҡөрьән-Кәримдә шулай тиелә: "Һеҙҙән йәмғиәт ойошасаҡ. Һәм ул яҡшылыҡҡа өндәйәсәк, ә насарлыҡтан арындырасаҡ. Һәм шул кешеләр именлектә буласаҡ". Мөхәммәт бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) ошоға өҫтәп: "Арабыҙҙа һәр ваҡыт Хоҙайҙың әмерен үтәүселәр булыр. Уларҙы һис кем хурлай алмаҫ, бер кем уларға ҡаршы тора алмаҫ", - ти.

Шулай итеп, йәмғиәт эсендә булған берҙәмлек маҡсатҡа өлгәшеүҙең шарты булып тора. Йәмғиәт ҙур булмаһа ла, әгәр берҙәм икән, көслө буласаҡ, ә ҡаршылыҡтар, бәхәстәр һан менән алдырғандарҙы ла көсһөҙгә әйләндерә, тарҡата. Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Аллаһтың мәрхәмәтлелеге - йәмғиәттә. Кем унан айырыла, йәһәннәм утына инер". Тағы ла: "Йәмғиәт - рәхимлелек. Тарҡалыу һәм бәхәстәр - яза". Ҡөрьәндә Хоҙай беҙҙе шулай тип иҫкәртә: "Бер-береһе менән килешә алмағандар һәм төркөмдәргә бүленгәндәргә оҡшамағыҙ. Уларға ҡаты яза әҙерләнгән"; "Аллаһы Тәғәләгә һәм уның илсеһенә буйһоноғоҙ һәм үҙ-ара бәхәстәргә инмәгеҙ, юҡһа ҡыйыулыҡтан һәм ҡеүәттән мәхрүм ҡалырһығыҙ. Сабыр булығыҙ, сөнки Аллаһ - сабырҙар яғында".

Бынан тыш, күп аяттарға, хәҙистәргә булған аңлатмаларҙа, Ислам йәмғиәте берләшеү арҡаһында ғына Аллаһтың язаһына, баҫылыуға һәм данһыҙлыҡҡа илткән эске тарҡалыуҙан, сыуалыштарҙан ҡотола аласаҡһығыҙ, тиелә. Йәмғиәттә берҙәмлеккә өлгәшеү, уның ағзаларының татыулығын нығытыу өсөн һәр мосолманға Аллаһтың (Ҡөрьәндең) һүҙенә һәм Бәйғәмбәрҙең (с.ғ.с.) сөннәтенә ныҡ тотонорға кәрәк. Сәләмәт һәм көслө йәмғиәт булһын өсөн, һәр ағзаһы сабырлыҡ, күндәмлек, бирешмәүсәнлек, тоғролоҡ, һүҙендә тороу, ышаныс белдереү кеүек сифаттарға эйә булырға тейеш.

Аллаһы Тәғәлә Ҡөрьән аша беҙгә өндәшә: "Иманға килеүселәр! Сабыр итегеҙ [Аллаһҡа табыныу һәм тормош ауырлыҡтарына], ныҡ булығыҙ [дошманға ҡаршы алыш барғанда]. Һәм Аллаһтан ҡурҡығыҙ - бәлки, һеҙ уңыш ҡаҙанырһығыҙ".

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК

## Кремний һәм сәләмәтлек

**Кремний - киң таралған тәбиғи ҡатнашма (ер ҡабығы массаһының 25 проценттан күберәген тәшкил итә) һәм барлыҡ организмдар һәм үсемлектәрҙең йәшәүендә төп ролде алып тора. Кремний, пьезоэлемент булараҡ, тәнгә ят микроорганизмдарҙы (шул иҫәптән вирустарҙы ла) магнит кеүек тартып ала һәм уларҙы организмдан сығара. Бынан тыш, ул организмдың нервылар селтәре буйынса мәғлүмәт бәйләнешен тәьмин итә.**

Организмға кремний етмәгәндә төрлө системаларҙың һәм матдәләр алмашыныуы балансының эшмәкәрлеге боҙола, организмға кәрәкле элементтар үҙләштерелмәй. Эсәктәрҙән килгән шлактарҙы абсорбциялау өсөн дә кремний каллоидтары кәрәк.

Кремний организмдағы барлыҡ һығылмалы системаларҙы тәьмин итә: тарамыштарҙы бәйләүсе туҡымаларҙы, ҡан тамырҙары һәм ашҡаҙан-эсәк тракты стеналарын, кимерсәктәрҙе, йөрәк ҡапҡасын, АЭТ сфинктерҙарын һ.б.

Әгәр организмға кремний етмәһә, ул уны тағы ла активыраҡ матдә - кальций менән алмаштыра һәм организмдың һығылмалы системаларын ҡатландыра. Шул сәбәпле остеохондроз, атеросклероз (кальцийҙың ҡаты энәләренә холестерин ултыра), полиартрит, йөрәк ҡапҡасының кальцийланыуы һ.б. кире күренештәргә килтерә. Кремний барлыҡ тере организмдарға ла йәшәү өсөн кәрәк.

Шул уҡ ваҡытта, кеше организмында кремнийҙы ашаусылар булып бабаҫырҙар һәм бәшмәктәр тора. Улар, шулай итеп, организмды емереүҙән тыш, икенсе һиҙелерлек зыян килтерә.

Кемдең организмында кремний аҙ, уларҙа инсульт, инфаркт, шәкәр диабеты, яман шеш, гепатит вирусы барлыҡҡа килеүе асыҡланған. Кремний аҙ булғанда кальций насар үҙләштерелә һәм уны актив стронций (һөттә һәм һөт продукттарында бар) алмаштыра, организмда йәйләп һөйәк системаһын емерә башлай. Был остеопорозға, артритҡа килтерә. Һөйәктәр йомшаҡҡа һәм тиҙ һыныусанға әйләнә.

Тимәк, организмда кремнийҙың нормаль күләмен һаҡлау өсөн тулыһынса бабаҫырҙарҙан һәм бәшмәктәрҙән ҡотолорға кәрәк! Кремнийҙың кеше өсөн иң арзанлы сығанағы - аҡ һәм зәңгәр балсыҡ. Балсыҡ, составында кремний булыуы һөҙөмтәһендә, организмдан төрлө ҡалдыҡтар, ағыуҙар, токсиндарҙы сығара, һөйәктәрҙе нығыта, ауырыу тыуҙырыусы бактерияларҙы, вирустарҙы, стафилоккоктарҙы үлтереүсе тәбиғи антисептик булып тора.

В. И. Вернадский юҡҡа ғына: "Бер ниндәй организм да кремнийһыҙ йәшәй алмай", - тимәгән.

## Паразиттар тураһында

Яҙып үтеүебеҙсә, кешеләрҙән 98 процентында паразиттар (гельминттар, бәшмәктәр һ.б.) йәшәй. Космоэнергетика каналдары гельминттарҙан да таҙарындыра ала. Мәҫәлән, бер пациенттың сеанстан һуң эсәктәренән бер нисә килограмм бабаҫыр, икенсеһенең алтынсы сеанстан һуң бөйәл ҡыуыҡтан ниндәйҙер ҡойороҡло паразиттар сыға.

Әммә иң мөһиме - яҙлы-көҙлө паразиттарға ҡаршы программаны үҙаллы үтеү. Бер пациент сеанстарға йылдан ашыу йөрөй, тотош организмы көслө таҙарыныу үтә, ул артыҡ 15 килограмынан ҡотола, нескә булып ҡала, гипертония яфаламай башлай, башҡа проблемалары ла бөтә, әммә айырым бер ағзаһындағы проблеманы бер нисек тә хәл итеп булмай. Сәбәбе ябай булып сыға - паразиттар.

Бабаҫырҙар теләһә ниндәй ағзала ла булыуы мөмкин - йөрәктә, күҙҙәрҙә, башта, тире аҫтында һ.б. Иң яратҡан урындары - эсәктәр (аҙыҡ күп).

Ә тире проблемалары (псориаз, диатез, һөйәл һ.б.) - организмда бәшмәктәр булыуы һөҙөмтәһе.

Паразиттарҙан ҡотолоуҙың иң һөҙөмтәле юлы - махсус үләндәр эсеү (махсуслашҡан дарыуханаларҙа һатыла), шул уҡ ваҡытта дегельминтизацияны бөтөн ғаилә менән бергә башлау зарур.

"Антипаразит" тип аталған йыйылма бар, уны инструкцияһына ярашлы, ете көн эсергә тәҡдим итәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта, паразиттарҙы эвакуациялауҙы тиҙләтеү өсөн көн һайын клизма (2 литр һыуға 1 балғалаҡ аш тоҙо, 1 ҡалаҡ алма һеркәһе йәки һарымһаҡ һуты һалырға) эшләргә кәрәк.

Артабан бер аҙна бәшмәктәргә ҡаршы үлән йыйылмаһын ("Грибокминус") эсергә, һуңынан бабаҫырҙарҙы сығарыу өсөн "Антипаразит" йыйылмаһы менән бер аҙналыҡ курсты ҡабатларға. Паразиттарҙан тулыһынса таҙарыныу өсөн һеҙҙең 7+7+7=21 көнөгөҙ китәсәк.

Бабаҫырҙарҙан ҡотолоуҙың тағы бер ябай ысулы: берәр бал ҡалағы әрем һәм ҡәнәфер онтағы, 1-2 төймә трихополды бер юлы эсегеҙ. Был курсты 5-7 көн дауамында көнөнә өс тапҡыр ашағандан һуң ҡабатлағыҙ. 7-10 көн үткәс тағы ҡабатлағыҙ.

Таҙарыныу осоро үткәнсе ашау рационына патологик микрофлораны юҡ итеүсе, дисбактериоздан ҡотолорға ярҙам итеүсе һарымһаҡ ашағыҙ.

Паразиттарҙан таҙарынғанда көн һайын иртән аҡ балсыҡ ашағыҙ. Ашағанға тиклем бер балғалаҡ балсыҡты бер стакан һыуҙа болғатып эсегеҙ. Аҡ балсыҡ булмағанда, уны күк балсыҡ менән алыштырырға була. Балсыҡта кремний күп (40 процент).

Яҡшы һөҙөмтә һәм туҡымаларҙың тиҙ тергеҙелеүе өсөн барлыҡ процедуралар барышында ҡабаҡ йәки шайтан таяғы (расторопша) майын көнөнә өс тапҡыр бер балғалаҡ эсергә кәрәк. Улар бер үк ваҡытта бауырҙың таҙарыуына ла булышлыҡ итә.

Бабаҫырҙар булғанда кеше татлы аҙыҡҡа тартыла - тәм-том бабаҫырҙарҙың яратҡан аҙығы. Шулай уҡ гельминттарҙың булыуын ҙур ҡорһаҡ аша ла белергә мөмкин.

## Тәнде таҙартыу

Хәҙерге ваҡытта даими рәүештә физик тәнде таҙартып тороу кәрәк, сөнки беҙ шул тиклем шлакланғанбыҙ. Ҡайһы берәүҙәрҙең эсәктәрендә 3-5 килограмм тиҙәк таштары (бәғзеләрҙең хатта 7-8 кг) бар. Улар ғәҙәти клизма ваҡытында сыҡмай (бөгөлдәрҙә ҡатып ҡалған). Тимәк, тәү сиратта, эсәктәрҙе таҙартырға кәрәк, һуңынан инде бауырҙы һәм үт ҡыуыҡтарын, бөйөрҙәрҙе һ.б.

Һәр яҙ һайын, ҡар ирей башлау менән тәнде таҙартырға тәҡдим ителә. Бындай процедураны көҙөн дә башҡарһағыҙ - тағы ла яҡшы. Таҙарыныуға тиклем бер нисә көн ҡала ит һәм сөтлө ризыҡтан баш тартыуығыҙ хәйерле. Һыуҙа бешкән (һоло, дөгө, ҡарабойҙай ярмаларынан) бутҡа, еләк-емеш, йәшелсә ашау, ҡымыҙ һәм башҡа әсе һөт продукттары эсеү файҙалы. Көн һайын душта ҡойонорға, мунса инергә кәрәк.

Ағзаларҙы таҙартыуҙы паразиттарға ҡаршы программанан һуң йәки бер үк ваҡытта үткәреү яҡшы, сөнки организмдан паразиттарҙың тарҡалыу продукттарын һәм ҡандағы оксиндарҙы таҙартыу зарур (тәнде таҙартыу программаһын авторҙың китабынан таба алаһығыҙ).

Таҙарыныу процедураларын аңлы рәүештә, ҡәнәғәтлек, рәхмәтле булыу тойғоһо менән башҡарығыҙ!

Кеше организмы лимфа төйөндәрендә күҙәнәк-ара ағыуҙарҙы туплай һәм артабан уларҙы юҡ итә. Шул уҡ ваҡытта ҡултыҡ аҫты соҡоро аша гормональ ағыуҙарҙың 50 проценты юҡ ителә! Әгәр тир биҙҙәрен ҡаплап ҡуйһаҡ, ағыуҙар һөт биҙҙәрендә, ҡулбаш мускулдарында туплана һәм артабан мастопатияға, башҡа кире күренештәргә килтерергә мөмкин. Шуға күрә организмдың тәбиғәт тарафынан күҙалланған яҡшы эшмәкәрлеген боҙмағыҙ - дезодорант ҡулланыуҙан тыйылығыҙ! Бары тик организмығыҙҙы таҙартығыҙ һәм тәнегеҙҙән тик тәбиғи еҫ кенә килер.

Тәндең тәбиғи еҫе бик мөһим. Барлыҡ хайуандар әсәләрен еҫ буйынса таба, был мәғлүмәт алмашыныуы ла. Әгәр ҡатын-ҡыҙ хушбуй ҡуллана икән, бала ошо мәғлүмәттән мәхрүм ителә һәм ас булһа ла әсәһен сит кеше тип ҡабул итеп, имеүҙән дә баш тартыуы ихтимал.

Ҡайһы бер ҡыҙҙар, ни өсөн, барлыҡ тырышлыҡҡа ҡарамаҫтан (химмәтле косметика, хушбуйҙар), ир-ат үҙҙәренә иғтибар итмәгәненә аптырай. Барыһы ла ябай ғына: ирҙәрҙең аҫҡы аңы уларҙы ҡатын-ҡыҙ итеп ҡабул итә, таный һәм кәрәкле мәғлүмәт ала алмай - хушбуй еҫе мәғлүмәтте баҫа! Бындай ҡатын-ҡыҙ сәскә кеүек ҡабул ителә - һоҡландылар, үйнанылар һәм ... онотолар! Иң яҡшыһы - тәнегеҙҙе тәбиғи таҙалыҡта тотоғоҙ. Саф тәндә - таҙа мәғлүмәт. Таҙалыҡ - һаулыҡ нигеҙе!

**Рауфан МОРТАЗИН.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Баш һүҙ урынына

*"Бер ваҡыт кемдер: "Уныш - ул тәғәйенләнгән пункт түгел, ә сәйәхәт", - тип бик матур әйткән. Бәхетте юл һуңында - сәйәхәт тамамланып, ҡыуаныу өсөн һуң булғас түгел, ә юл ыңғайы эҙләү зарур. Шуға күрә бөгөн - ошо көндә, ошо сәғәттә, ошо минутта тап һинауҙар һәм проблемалар осрағаны өсөн тормош матур һәм һоҡланғыс икәнен аңларға кәрәк".*

*Роберт Р. Апдеграф*

Аҡыл, тән һәм характерҙың абсолют камиллығына өлгәшеү өсөн эшләнгән ғәмәлдәрҙең идеаль планы тураһында был китап.

Һәр ҡайһыбыҙҙың матур йәшәү, бөйөк булыу, бәхетле, уңышлы, сағыу тормош менән йәшәү мөмкинлеге бар. Ҡайһы бер кешеләрҙә был потенциал ҡайҙалыр төптә ята һәм ҡасан уятырҙар, эшкә ҡушырҙар инде, тип көтә. Ошо утты яндырыуҙан һәм уны шәхси камиллыҡҡа, йәнле тормошҡа өлгәшеүгә йүнәлтеүҙән дә изге эш юҡ.

Һеҙгә тәҡдим ителәсәк китап яҙмалары тап шундай һөҙөмтәгә өлгәшергә ярҙам итәсәк сара булып тора ла инде.

Гималайҙың таулы юлында аҡһаҡалды осратҡан, арыған, талсыҡҡан юлсы тураһында легенда бар. Юлсы аҡһаҡалдан тау башына - тәғәйен еренә барып етеү өсөн юл һорағас, ҡарт бер аҙ уйланып торған да: "Һин бары тик һәр бәләкәй генә аҙымың тау башына алып барыуына инанырға тейешһең - һәм һин тау башында буласаҡһың", - тип яуаплаған.

Һәр уй, һәр ғәмәл тормоштағы иң изге маҡсаттарға өлгәшеүгә йүнәлтелергә тейеш - бары тик шул осраҡта ғына һеҙҙе бер нәмә лә туҡтата алмаясаҡ һәм һеҙ бөйөк ҡаҙанышҡа, бәхеткә дусар буласаҡһығыҙ. Аҡылығыҙҙы, тәнегеҙҙе, характерығыҙҙы нығытһағыҙ, тормошоғоҙ бығаса хыяллана ла алмаған яңы ҡеүәтле һиҙаттар менән тулыланыр.

## Төп саҡырыу

*Бәғзеләр әйберҙәрҙе нисек бар, шулай күрә һәм: "Ни өсөн?" - тип һорай; мин бер ваҡытта ла булмаған әйберҙәр хаҡында хыялланам һәм: "Ә ни өсөн мөмкин булмаҫҡа тейеш?"- тигән һорау ҡуям.*

*Джордж Бернард Шоу.*

Эштәрен гөрләргә мәжбүр иткән кешеләр була. Шулай уҡ кемдер бары тик уларҙың эше гөрләгәнен күҙәтеп кенә тора. Кемдер һәр саҡ: "Нимә булды?" - тип һорарға ярата. "Ысын тормошҡа сәйәхәт" программаһы тормошоғоҙҙоң һәр өлкәһендә лә эштәрегеҙҙе гөрләргә мәжбүр итәсәк. Һеҙ аҡылды, тәнде, характерҙы нигеҙҙә яҡшыртыу өсөн ҡулланылған иң нескә стратегияларҙы һәм ысулдарҙы ҡулланырға өйрәнерһегеҙ. Һеҙҙә ҡасандыр хыялланған хыялығыҙҙы тормошҡа ашырырлыҡ энергия булыуында шик юҡ. Ниндәй генә камиллыҡ эҙләһәгеҙ ҙә - аҡыл, физик, эмоциональ йәки финанс йәһәтенән булһынмы ул - ошо программа ярҙамында уға нисек өлгәшергә өйрәнерһегеҙ.

**Робин ШАРМА,**
**хоҡуҡ докторы.**



## 27 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "Право на защиту"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Понять. Простить"
14.00 Другие новости
14.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
17.05 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.15 "Выборы-2012"
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Папаши". Сериал
22.30 "Первый класс" с Иваном Охлобыстиным"
23.35 Ночные новости
23.50 "Любовники". Мелодрама
01.55, 03.05 "Девять месяцев". Комедия
03.00 Новости
03.50 "Холод. В поисках бессмертия"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 251-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Вести-Башкортостан"
16.50 "Кровинушка", 15-я серия. Сериал
17.50 "Хозяйка моей судьбы", 40-я серия
18.50 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.30 "Вести-Башкортостан"
20.40 "Спокойной ночи, малыши!"
20.50 "Люба. Любовь", 1-я серия
21.50 "Выборы-2012"
22.50 "Честь имею!.." 1-я и 2-я серии
01.50 "Вести+"
02.15 "Чак-3"
04.00 "Комната смеха"

### НТВ
05.55 "НТВ утром"
08.30 "Морские дьяволы". Сериал
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.25 "Прокурорская проверка"
17.40 "Говорим и показываем"
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Чужой район". "Игрок", "Обход". Сериал
21.25 "Ментовские войны-5". "Другая река". Остросюжетный сериал
23.15 "Сегодня. Итоги"
23.35 "Конец старого света"
00.10 "Школа злословия"
00.55 "Главная дорога"
01.35 "Центр помощи "Анастасия"
02.25 "В зоне особого риска"
02.55 "Холм одного дерева". Сериал
04.55 "Молодые и злые". Сериал

### БСТ
**07.00 "Салям"**
**10.00, 12.15, 17.45 "Полезные новости"**
**10.10, 18.00 "Выборы-2012"**
**10.20, 15.15 "Учим башкирский язык"**
**10.30, 15.30 "Гора новостей"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 18.15 "Замандаштар"**
**11.15 "Орнамент"**
**11.30, 12.30, 13.30, 14.30, 16.30, 17.30 "Новости"**
**11.45 "Новости недели"**
**12.45, 17.15 "Надо знать!"**
**13.00, 22.00 "На самом деле"**
**13.45 "Бахетнама"**
**14.45 "В активном поиске"**
**15.45 "Царь горы"**
**16.00 "Бауырхак"**
**16.15 "Шатлык йыры"**
**16.45 Документальный фильм**
**18.30 "Новости" (на башк. яз.)**
**18.40, 23.45 "Дневник конкурса "Хылыукай-2012"**
**18.55 Открытый Чемпионат России по хоккею - Чемпионат ВХЛ. "Торос" (Нефтекамск) - "Рубин" (Тюмень)**
**21.30 Новости (на русск. яз.)**
**23.00 "Пора разобраться"**
**22.30 "Новости" (на башк. яз.)**

## 28 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.40 "Право на защиту"
11.50 "Женский журнал"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Понять. Простить"
14.00 Другие новости
14.20 "Хочу знать" с Михаилом Ширвиндтом"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "Обручальное кольцо". Сериал
17.05 "Свобода и справедливость" с Андреем Макаровым"
18.00 Вечерние новости
18.15 "Выборы-2012"
18.50 "Давай поженимся!"
19.55 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Папаши", 2-я серия
22.30 "Татьяна Васильева. Я умею держать удар"
23.35 "Ночные новости"
00.00 "Следствие по телу", 8-я серия
00.50 Церемония вручения наград американской киноакадемии "Оскар-2012". Передача из Лос-Анджелеса
02.40, 03.05 "Влечение"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести-Башкортостан"
11.50 "Кулагин и партнеры"
13.00 "Тайны следствия". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 252-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Кровинушка", 16-я серия
17.50 "Хозяйка моей судьбы", 41-я серия
18.50 "Прямой эфир"
20.00 "Вести"
20.20 "Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
